РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ МӘҒАРИФ МИНИСТРЛЫҒЫ

ФЕДЕРАЛЬ ДӘҮЛӘТ БЮДЖЕТ ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘҒАРИФ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ

“М. АҠМУЛЛА ИС.

БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ ПЕДАГОГИЯ УНИВЕРСИТЕТЫ”

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ГРАЖДАНЛЫҠ ЙӘМҒИӘТЕНӘ ЯРҘАМ ФОНДЫ

# ТЫУҒАН ЯҒЫМ – СТӘРЛЕБАШ

Стәрлебаш районының балалар баҡсаларында үткәрелгән тәрбиәүи сараларҙың эшкәртмәләре



Өфө – 2021

УДК: 811.511:373.24
ББК: 81.632.2+74.102
Т 93

**Рецензенттар:**

филология фәндәре кандидаты, доцент В.З. Толомбаев (М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Өфө ҡ.); Г.С. Зәйетҡолова, балалар баҡсаһы мөдире (277-се балалар баҡсаһы муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы, Өфө ҡ.); Г.Х. Хөснитдинова, өлкән тәрбиәсе ("Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназия" МАДББУ, Стәрлетамаҡ ҡ.)

Т 93 Ғәлина Ғ.Ғ., Дәүләтҡолова Г.Ш., Солтаҡаева Р.А., Таһирова С.А., Хөсәйенова Л.М. Тыуған яғым – Стәрлебаш: Стәрлебаш районының балалар баҡсаларында үткәрелгән тәрбиәүи сараларҙың эшкәртмәләре: уҡытыу-методик ҡулланма. – Өфө: М.Аҡмулла ис. БДПУ, 2021. – 80 бит.

“Остаз” балалар баҡсаһы тәрбиәсеһенең педагогик оҫтаханаһы” проекты сиктәрендә әҙерләнгән “Тыуған яғым – Стәрлебаш” тәрбиәүи саралар эшкәртәмәләре йыйынтығы балалар баҡсаларының төрлө төркөмдәрендә башҡорт телен, мәҙәниәтен, фольклорын өйрәтеү маҡсатында ерле материалға таянып, балаларҙың туған телдә аралашыу телмәрен үҫтереү, фольклор өлгөләре менән таныштырыу, ерле материал аша тыуған ергә һөйөү тәрбиәләүҙе үҙ эсенә ала.

Эшкәртмәләр балалар баҡсалары тәрбиәселәренә, башланғыс класс уҡытыусыларына, “Мәктәпкәсә белем биреү”, “Башланғыс кластар” йүнәлештәрендә уҡыусы студенттарға, ата-әсәләргә тәғәйенләнә.

© М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, 2021

© Башҡортостан Республикаһының Граждանлыҡ йәмғиәтенә ярҙам фонды, 2021

**Баш һүҙ**

М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты ғалимдары Башҡортостан Республикаһының гражданлыҡ йәмғиәтенә ярҙам фонды тарафынан тормошҡа ашырылған Башҡортостан Республикаһы Башлығының гранты – “Остаз” балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе оҫтаханаһы” проекты сиктәрендә башҡорт теленең өс диалектындағы балалар баҡсалары тәрбиәселәре менән эш алып барҙы.

Тәҡдим ителгән уҡытыу-методик ҡулланмала көньяҡ диалект вәкилдәре булған Стәрлебаш районы балалар баҡсалары тәрбиәселәре үткәргән тәрбиәүи сараларҙың эшкәртмәләре тупланды. Был сараларҙың төп маҡсаты: башҡорт телен балалар баҡсаларынан уҡ урындағы һөйләш үҙенсәлектәренә таянып өйрәтеү, диалекттағы һәм әҙәби телдәге башҡорт һүҙҙәре менән балаларҙың телмәрен байытыу, ата-бабаларыбыҙ белгән йола-кәсептәр менән таныштырыу, балаларға уларға бәләкәйҙән таныш ер-һыу атамаларының легенда һәм риүәйәттәре тураһында һөйләү һәм тыуған яҡҡа һөйөү тәрбиәләү. Апробация үткән был эшкәртәмәләрҙе Башҡортостаныбыҙҙың башҡа балалар баҡсаларында үткәрергә тәҡдим итәбеҙ.

Уҡытыу-методик ҡулланманы баҫмаға әҙерләгән төркөм исеменән, Стәрлебаш районы балалар баҡсалары тәрбиәселәренә үҙҙәренең эш тәжрибәһе менән уртаҡлашҡандары өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

**Абдуллина Г.И., Вәхитова М.Ф.**
Йәлембәт ауылы балалар баҡсаһы МБМЙББУ

# БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ СУВЕРЕНИТЕТЫ КӨНӨНӘ АРНАЛҒАН “СӘСКӘ АТ, БАШҠОРТОСТАНЫМ!” БАЙРАМЫ СЦЕНАРИЙЫ

**Маҡсат:**

Балаларҙы Башҡортостан Республикаһы символикалары менән таныштырыу, алып барыусыларҙың аңлатыуҙарын тыңлай белергә өйрәтеү. Телмәр, түҙемлек, етеҙлекте үҫтереү. Уйында бер-береңә ярҙам итеү теләге уятыу. Тыуған илгә һөйөү, ғорурланыу тәрбиәләү.

**Йыһазланырыу:** 3 яулыҡ, 3 ултырғыс, DVD, балалар өсөн караоке, Башҡортостан флагы, серле һандыҡ, ҡурай, ҡурай башаҡтары.

**Балалар башҡорт милли кейемдәрендә ҡулдарына Башҡортостандың флагын тотоп теҙелешеп килеп инәләр.**

**1-се алып барыусы:** Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар, балалар!

**2-се алып барыусы:** Бөгөн Башҡортостан Республикаһының тыуған көнө.

**1-се алып барыусы:** Ошо көҙҙөң матур көнөндә, 1990 йылдың 11 октябрендә, беҙҙең илебеҙ суверенлы Республика, тип иғлан ителде. Беҙҙен халыҡ беренсе тапҡыр үҙенең президентын һайланы. Һуңғараҡ Башҡортостандың флагы, гербы, гимны ҡабул ителә. Беҙҙең гимндың авторы – Фәрит Фәтих улы Иҙрисов. Уны тыңлаған саҡта бөтәһе лә баҫып тыңларға тейеш.




**1-се бала:**

Гимн яңғырай –
Ул ниндәй көслө.
Ватанын уйлай
Тыңлаған кеше.

***Гимн яңғырай. Бөтәһе лә баҫа.***

**2-се алып барыусы:** 1992 йылдың 25 февралендә Республикабыҙҙың флагы ҡабул ителә. Уны рәссам Урал Мәсәлимов яһаған.

**2-се бала:**

Байрам бөгөн, байрам бөгөн –
Республикамдың көнө.
Флаг яһаным байрамға,
Миңә шундай күнелле!

**3-сө бала:**

Башҡортостаным флагы
Тора өс төрлө төҫтән.
Күк, аҡ, йәшел, ә уртаға
Ҡурай сәскәһе төшкән.

**1-се алып барыусы:** Ҡарағыҙсы, балалар! Беҙгә кемдер тылсымлы һандыҡ ҡалдырып киткән. Уны ҡурай сәскәһе менән йоҙаҡлап ҡуйғандар, уның һәр тажының артында беҙгә эштәр яҙылған. Әгәр ҙә беҙ ҡурай сәскәһенен эштәрен үтәһәк, тылсымлы һандыҡ беҙгә асыласаҡ.

**2-се алып барыусы:** Әйҙәгеҙ әле **беренсе** тажды өҙөп алайыҡ. Бында Башҡортостан тураһында йыр йырларға ҡушылған. Ә һеҙ шундай йыр беләһегеҙме?

***Йыр “Башҡортостан – илгенәм”***
***А. Игебаев һүҙ., Г. Ишҡыуатова муз.***
Сабый саҡтан күкрәгемә
Һулар һауам – йәнгә дауам,
Тамыр йәйгән гөлгөнәм.
Сыуаҡ, матур көн генәм.
Һулыш биргән, тормош биргән,
Күнелдәргә йәйғор һуҙған,
Әсәкәйем, бергенәм,
Йор һәм сәсән тел генәм,
Күп милләтле дәүләтем һин.
*Ҡушымта:*
Тиңдәр менән тиң генәм
Башҡортостан – илгенәм,
Ғүмер иткән, донъя көткән,
Илгенәм, илгенәм,
Йән ереккән ергенәм.
Тиңдәр менән тиң генәм,
Тамыр йәйгән гөлгөнәм,
Гөлгөнәм, гөлгөнәм,
Башҡортостан – илгенәм.

**1-се алып барыусы:** Афарин, балалар! Бик матур йыр йырланығыҙ.

**2-се алып барыусы:** Хәҙер **икенсе** тажды өҙөп алдыҡ. Унда бик ҡатмарлы һорауҙарға яуап бирергә ҡушылған.

1. Беҙ ниндәй Республикала йәшәйбеҙ? *(Башҡортостан Республикаһында)*

2. Башҡортостандың баш ҡалаһы нисек атала? *(Өфө)*

3. Районыбыҙ нисек атала? *(Стәрлебаш районы)*

4. Ниндәй ауылдарҙан йыйылғанбыҙ? *(Һарайҫа, Йәлембәт, Өмөтбай ауылдарынан)*

**2-се алып барыусы:** Афарин, балалар! Был эште лә йәһәт кенә башҡарҙығыҙ.

**1-се алып барыусы: Өсөнсө** тажды ла өҙөп алайыҡ әле. Балалар, бында Тыуған ил тураһында шиғырҙар һөйләргә ҡушылған.

**4-се бала:**

Башҡортостан, һин беҙҙең
Тыуған, үҫкән илебеҙ.
Беҙгә икмәк, өй биргән,
Һыуын эскән еребеҙ.

**5-се бала:** Бер ергә ҡарайым үҙем,
Бер зәңгәр күктә күҙем,
Һин генәһең, бер генәһең,
Ғәзиз илкәйем минең.

**6-сы бала:**

Тауың бирә һары алтын,
Ерең бирә ҡара алтын.
Балыҡҡа бай һыуҙарың,
Ашлыҡҡа бай ҡырҙарың.

**7-се бала:**

Тирә-яҡта урман шаулай,
Гөл сәскәле еркәйем.
Матурҙарҙан-матур үҙең,
Тыуып үҫкән илкәйем.

**8-се бала:**

Беҙҙең Ватан шундай матур,
Ҡояштай балҡып тора.
Тауҙары, зәңгәр болоттай,
Күктәргә ҡалҡып тора.

**9-сы бала:**

Ағасҡа бай урманың,
Таҡыр һинең юлдарың,

Матур һинең ҡырҙарың,
Батыр һинең улдарың.
**10-сы бала:**
Башҡортостан, беҙ һине
Һөйәбеҙ, яратабыҙ,
Һин бит тыуған еребеҙ,
Әсәйебеҙ, атабыҙ!
**11-се бала:**
Урмандар, әкиәт шикелле,
Гөр килеп, шаулап тора.
Ал, ҡыҙыл, зәңгәр сәскәләр
Күҙҙәрҙе ялмап тора.
**12-се бала:**
Күп милләттәр илендә
Беҙҙең Ватан бер генә,
Сәскә генә, гөл генә,
Беҙҙең Тыуған ил генә.
**13-сө бала:**
Дуҫ илдәр менән бергә
Үҫкән матур сәскә һин,
Иң бәхетле, иң гүзәл ил,
Сәскә булып йәшә һин!
**14-се бала:**
Иң ҡәҙерле, иң һөйөклө
Тыуып үҫкән ил бит ул,
Йөрәктәрҙә тамыр йәйгән
Шиңмәй торған гөл бит ул.
**15-се бала:**
Тыуған илем, тыуған ерем –
Минең Башҡортостаным.
Тыныс булһын, имен булһын,
Көндәрем һәм ал таңым.
**16-сы бала:**
Тыуған илем – дуҫлыҡ иле,

Беҙҙә халыҡ дуҫ йәшәй,
Бөтә милләт халыҡтарын
Туған итте ҙур Рәсәй.

***Йыр “Минең Ватаным”.***
***Г. Хәлфетдинова һүҙ., Г. Ишҡыуатова муз.***
Тауҙар, урмандар,
Бүре, айыуҙар,
Сыр-сыу турғайҙар,
Таҙа урамдар.
Ялтыр балыҡтар.
Наҙлыҡай елдәр.
Ҡояш-ямғырҙар,
Ҡыҙҙар, малайҙар,
Тәҙрә биҙәгән
Ҡарлы бурандар.
Төрлө халыҡтар.
Сәскәле гөлдәр.

*Ҡушымта:*
Минең Ватаным был –
Тәрән тамырым.
Бәхетемде ситтә түгел,
Һиндә табырмын.



**2-се алып барыусы:** Афарин, балалар! Ә хәҙер **дүртенсе** тажды өҙөп ҡарайыҡ әле. Бында “Ҡурай сәскәһе” бейеүен бейергә ҡушҡандар. Бейеп күрһәтәйекме?

***“Ҡурай сәскәһе” бейеүе.***

**2-се алып барыусы:** Бик матур бейеү башҡарҙығыҙ, беҙгә бик оҡшаны.

**1-се алып барыусы: Бишенсе** тажда ниндәй эш бирелгән икән, уҡып ҡарайыҡ әле. Ә бында Тыуған ил, тыуған ер тураһында мәҡәлдәр әйтергә кәрәк. Кемдәрегеҙ беләә?

**1-се бала:** Иле ныҡтың – биле ныҡ.

**2-се бала:** Алтын-көмөш яуған ерҙән

Тыуған-үҫкән ил яҡшы.

**3-сө бала:** Тыуған ерҙең туҙаны ла ҡәҙерле.

**4-се бала:** Ерен һатҡан – илен һатҡан.

**5-се бала:** Ере байҙың – иле бай.

**1-се алып барыусы:** Һай, афарин, балалар. Был эште лә атҡарып сығарҙығыҙ.

**2-се алып барыусы:** Артабанғы **алтынсы** тажды өҙөп алайыҡ әле. Унда башҡорт халыҡ уйыны “Тирмәкәйҙе” уйнап күрһәтергә ҡушҡандар.

***Уйын “Тирмәкәй”.*** *(Бишбармаҡ көйөнә)*



**2-се алып барыусы:** Афарин, балалар! Бик матур итеп уйнанығыҙ. Беҙ ҙә шулай бәләкәй сағыбыҙҙа уйнай торғайныҡ.

**1-се алып барыусы:** Аҙаҡҡы **етенсе** тажды өҙөп уҡыйыҡ әле. Унда күмәк бейеү бейергә ҡушҡандар.

***Парлы бейеү.***

**1-се алып барыусы:** Афарин, балалар! Бик матур бейенегеҙ.

**2-се алып барыусы:** Бына серле һандыҡтың йоҙағы ла асылды. Унда нимә бар икән, асып ҡарайыҡ әле. Был бит ҡурай! Ҡурай – башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы. Ул – үҫемлек, ерҙә үҫә. Ата-бабаларыбыҙ уға тишектәр тишеп, һыҙғырып көй сығарғандар. Әлеге ваҡытта ла ҡурай моңон бик яратып тынлайҙар, бейейҙәр. Әйҙәгеҙ әле, беҙ ҙә күмәкләшеп ҡурай моңона бейеп алайыҡ.

***Ҡурай моңона күмәк бейеү.***

**2-се алып барыусы:**

Тыуған яғым – алтын баҫыу,
Бейек тауҙар, ҡалын урман.
Тыуған илем – Башҡортостан,
Уның менән ғорурланам.

**1-се алып барыусы:**

Кешеләре татыу, уңған,
Тыныс ҡына ата һәр таң.
Киләсәге яҡты, матур,
Башҡортостан – беҙҙең Ватан.

**Атанғолова Р.Т.**
Стәрлебаш ауылының 3-сө балалар баҡсаһы МБМББУ

## “СЕРЛЕ ҺАНДЫҠ”
## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ МИЛЛИ КЕЙЕМДӘРЕ

**Маҡсат:**

- балаларҙың һүҙ байлығын артырыу;

- башҡорт халыҡ кейемдәренең үҙенселәктәре менән танышыуҙы дауам итеү;

- тыуған илгә ҡарата һөйөү тойғоһын тәрбиәләү;

- балаларҙың фекерләү һәләтен үҫтереү;

- балаларҙы башҡорт халыҡ ижады (йолалары, йырҙары, уйындары) менән таныштырыуҙы дауам итеү;

- халыҡ кейемдәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Башҡорт халҡынын милли кейемдәре:** түшелдерек, сәсүрместәр, камзул, көмөш тәңкә, мәрйен, ситек, маңлайса, таҡыя, ҡалпаҡ, бүрек, түбәтәй һ.б.

**Һүҙлек эше:** түшелдерек, сәсүрмес, ситек.

**Ҡабатлау:** камзул, күлдәк, таҫма, таҡыя.

**Йыһазландырыу:**

- ҡурсаҡ (милли кейемдә);

- башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының, ир-егеттәренең милли кейеме;

- ҡурай моңо (аудиояҙма);

- сюжетлы һүрәттәр.



**Дәрес барышы**

Тәрбиәсе балалар менән иҫәнләшә. Талғын ҡурай моңо яңғырай, балалар үҙҙәренең урындарына ултырыша.

- Һаумыһығыҙ, хәйерле иртә, балалар! Бөтәгеҙгә лә яҡшы кәйеф теләйем. Әйҙәгеҙ, бер-берегеҙгә ҡарап, йылмайып алайыҡ әле. Афарин, балалар! Бөгөн мин ҡунаҡҡа ағинәйҙе саҡырҙым.

*Ишек шаҡыйҙар һәм һандыҡ тотҡан инәй керә.*

- Һаумыһығыҙ, инәй (әбей), түрҙән уҙығыҙ.

- Һаумыһығыҙ, балалар, һаумыһығыҙ, ҡыҙым!

- Рәхим итеп ултырығыҙ, инәй, тылсымлы һандыҡты ла онотмағанһығыҙ, рәхмәт!

- Бөгөн беҙ башҡорт халыҡ милли кейеме менән танышыуҙы дауам итәбеҙ.

- Был нимә, балалар? (Күлдәк)

- Ниндәй төҫтә? (Һары, ҡыҙыл)

- Күлдәк нимә менән биҙәлгән? (Таҫма)

- Быйндай итәкте нисек атағандар? (Бәбәй)

- Быныһы нимә? (Камзул)

- Камзул нимә менән биҙәкләнгән? (Төҫлө таҫмалар менән)

- Быныһы түшелдерек, уны күлдәк өҫтөнән таҡҡандар. Ул тәңкәләр менән биҙәкләнгән. Әйҙәгеҙ әле, бергәләп ҡабатлайыҡ: түшелдерек, тәңкәләр.

- Был нимә? (Маңлайса)

- Нимә менән биҙәкләнгән? (Тәңкәләр менән)

- Кемдәр кейгән уны? (Ҡыҙҙар)

- Афарин, балалар, был ҡыҙҙарҙы биҙәүсе маңлайса.



- Был таҫма – сәсүргес. Сәскә ошо тәңкәләр менән биҙәлгән таҫманы ҡушып үргәндәр. Инәй, беҙгә оҙон сәсле ҡыҙҙың сәсен үреп күрһәтегеҙ әле.

- Әйҙә әле, Радмила ҡыҙым, һиңә килешеп торор ул.

**Ял минуты.** **“**Әйтегеҙсе, балалар!”

Әйтегеҙсе, балалар!
Нисек иҙән йыуалар?
Бына шулай, бына шулай йыуалар.
Әйтегеҙсе, балалар,
Нисек утын яралар?
Бына шулай, бына шулай яралар.
Әйтегеҙсе, балалар,
Нисек бесән сабалар?
Бына шулай, бына шулай сабалар.

Малайҙарҙың да кейемдәрен иҫкә төшөрөп үтәйек.

- Улар нимәләр кейгән? (күлдәк, салбар, камзул, таҡыя)

- Камзулды билбау менән бәйләп ҡуйғандар.

- Был нимә? (Таҡыя)

- Уны кемдәр кейгән? (Егеттәр)

- Ә ниндәй аяҡ кейеме кейгәндәр икән? Ағинәй, әйтеп кит әле. (Калуш, йөн ойоҡ, ситек)

**Йомғаклау.**

Шулай итеп, әгәр ҙә халҡыбыҙ үҙ асылын, милли кейемдәрҙе ҡәҙерләп һаҡлай икән, тимәк, бөгөнгөбөҙ ҙә, киләсәгебеҙ ҙә ышаныслы, оҙон ғүмерле булыр.

- Беҙ бөгөн нимә тураһында һөйләштек?

- Милли кейемдәр тураһында нимә белдегеҙ?

- Бөгөнгө көндә башҡорт халыҡ милли кейемен ҡайҙа осратырға була?

- Хәҙерге заманда кейер инегеҙме милли кейемдәрҙе?

- Көн дә кейелгән ир-егеттәрҙең баш кейеме нисек атала?

- Нимә ул маңлайса?



Рәхмәт, балалар. Һеҙ бөгөн бөтәгеҙ ҙә әүҙем ҡатнаштығыҙ. Башҡорт милли кейемдәре турһында күп ҡыҙыҡлы, файҙалы белем алдығыҙ. Башҡорттоң милли кейеме бай тарихлы китап кеүек ул, алдағы көндәрҙә лә туған телебеҙҙе һаҡлап һәм ғорурланып йәшәйек. Әйҙәгеҙ әле, ағинәй менән бергәләп, күңелле итеп сәй эсеп алайыҡ.

**Вәхитова М.Ф.**
Йәлембәт ауылы балалар баҡсаһы МБМББУ

## “ҺЫУ БУЙЫНА ЭКСКУРСИЯ” КОНСПЕКТЫ

**Маҡсаттар:**

- балаларҙың йылғa, уның әһәмиәте, атамаһы тураһындағы белемдәрен тәрәнәйтеү;
- туған тәбиғәткә ыңғай ҡараш тәрбиәләү;
- йылға буйында үҙеңде дөрөҫ тотоу ҡағиҙәләрен нығытыу;
- тема буйынса балаларҙың телмәрҙәрен байытыу, активлаштырыу.

**Алдан алып барылған эш:** йылғалар тураһында презентация ҡарау, ҡомда йылға һүрәтен төшөрөү, бер ата-әсә менән экскурсияға барып ярҙамлашырға һөйләшеү.

**Экскурсия барышы**



**Тәрбиәсе:** Бөгөн беҙ һеҙҙең менән экскурсияға барасаҡбыҙ, ә ҡайҙа барғаныбыҙҙы һеҙ йомаҡты сискәс белерһегеҙ.

*Башы тауҙа, аяғы диңгеҙҙә. (йылға)*

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, беҙ бөгөн һеҙҙең менән йылға буйына экскурсияға барасаҡбыҙ.

**Тәрбиәсе:** Иң беренсе йылға буйында үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрәйек. Нисек уйлайһығыҙ, йылға буйында үҙеңде нисек тоторға кәрәк?

**Балалар:** Ярҙың ситенә яҡын килергә ярамай. Йылға буйына өлкәндәр менән генә барырға ярай;

- һыуҙың таҙалығын һаҡларға;
- үҙеңде шым һәм һиҙҙермәй тот: ҡара, тыңла, шаулама.

**Тәрбиәсе:** Ә хәҙер бергәләшеп йылға буйына барайыҡ.

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙ йылғаның атамаһын беләһегеҙме?

**Балалар:** Күндерәк.

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, Күндерәк. Күндерәк йылғаһы тураһында борон йыр ҙа сығарғандар.

*Күндерәккәй буйы*

Иртәндәй генәй тороп, атҡай барһам,
Күндерәккәй буйы кәрешкә.
Сабырлыҡай – солтан, сабырһыҙ – шайтан,
Сабырлылар кәрәк һәр эшкә.
Күндерәккәй буйы – туғай-туғай,
Бер туғайы уның – андыҙлыҡ.
Моңло ла ғынай егет түгел инем,

Моңландыра икән яңғыҙлыҡ.

**Тәрбиәсе:** Күндерәк йылғаһы Ашҡаҙар йылғаһына барып ҡоя һәм улар тағы ла тулы йылға булып ағалар.

*Шунан һуң йылғаның ярҙарын ҡарау (текә, һөҙәк, ҡом менән һәм үҫемлек менән ҡапланған).*

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, әле йылғала һыу йылымы, һыуыҡмы? Ни өсөн? (*Балаларҙың иғтибарын һыуҙың төҫөнә, үтә күренмәлегенә йәлеп итеү)*

**Тәрбиәсе:** Эйе, йылғала һыу таҙа, үтә күренмәле. Ә йылғанан һыу эсергә яраймы?

**Балалар:** Юҡ.

**Тәрбиәсе:** Ни өсөн?

**Тәрбиәсе:** Йылғанан һыу эсергә ярамай, сөнки унда ҡаҙҙар йөҙөп йөрөйҙәр, малдар төшөп һыу эсә.

**Балалар:** Кешеләр һыу инәләр.

**Тәрбиәсе:** Эйе, йылғалағы һыуҙы эсергә ярамай, сөнки унда зарарлы микробтар булыуы ихтимал. Беҙ үҙебеҙҙең ҡойонан ғына таҙа һыу эсәбеҙ.

**“Һыу ниндәй була?” уйыны.**

***Яуаптар***: диңгеҙ, йылға, минераль, ямғыр, таҙа, бысраҡ, үтә күренмәле, төҫһөҙ, тәмһеҙ, эҫе, һыуыҡ, йылы һ.б.

“Һыу нимә эшләй ала?” – сылтырай, йүгерә, тама, аға һ.б.

**Тәрбиәсе:** Йылғала үҫемлектәр ҙә, хайуандар ҙа бер-береһе менән бәйле. Улар бер-береһенә кәрәк.

**Балалар:** Ҡаҙҙар балыҡ ашай һ.б.

**Тәрбиәсе:** Ни өсөн йылғалар бысрана? Йылғалар бысранмаһын өсөн ни эшләргә кәрәк?

**Балалар:** Сүп-сар түкмәҫкә, һыу буйында машина йыумаҫҡа һ.б.

**Тәрбиәсе:** Бик дөрөҫ уйлайһығыҙ, балалар. Әйҙәгеҙ, туп менән уйнап алайыҡ.

**“Яҡшы-насар” уйыны.**

*Тәрбиәсе туп менән түңәрәк уртаһында. Балаларға сиратлап туп бәрә һәм “Һыу – ул яҡшы. Ни өсөн?”, “Һыу – ул насар. Ни өсөн?” тигән һорауҙар бирә.*

**Балаларҙың яуаптары:**

**Яҡшы:** һыу эсер өсөн кәрәк; йыуыныр өсөн, ҡул йыуырға; һыу менән сынығырға була, уйнарға була, ашарға бешерергә, иҙән, һауыт-һаба, уйынсыҡтарҙы, кейемдәрҙе йыуырға; сәскәләргә, баҡсалағы үҫемлектәргә һыу һибергә; һыуҙа төрлө хайуандар йәшәйҙәр, һыу эргәһендә төрлө ҡоштар оя ҡоралар.

**Насар:** эҫе көндө һыуыҡ һыу эсһәң, ауырырға мөмкин; эҫе һыу менән бешергә мөмкин; һыуҙы иҙәнгә түкһәң, тайып йығылырға була; үҫемлектәргә бик йыш һыу һипһәң, улар серейҙәр; йөҙә белмәһәң, батырға мөмкин; һыу ташҡанда өйҙәргә зыян килә.

**Тәрбиәсе:** Һығымта. Һыу – ул планетабыҙҙың иң һоҡланғыс матдәһе. Һыу яҡшы дуҫ һәм ярҙамсы.

Бөгөн беҙ һыу тураһында нимә белдек? *(балаларҙың яуаптары)*

Ысынлап та, һыуһыҙ ерҙә йәшәп булмай, шуның өсөн уны һаҡларға һәм ҡәҙерләргә кәрәк.

Ә хәҙер һеҙҙең менән балалар баҡсаһына ҡайтабыҙ. Ҡайтҡас һеҙ бөгөнгө экскурсия тураһында һүрәт төшөрәсәкһегеҙ.

Беҙҙең экскурсия кемгә оҡшаны – сәпәкәй итегеҙ, кемгә оҡшаманы – аяҡтарығыҙ менән тыпырлағыҙ.



**Ғарифуллина Р.Ф.**
Айҙарәле ауылы балалар баҡсаһы МБМЙББУ

# «ШӘЖӘРӘ»БАЙРАМЫ

***Мин – тамырҙан сыҡҡан бер сәскә!***

**Маҡсат:** туғандарға һәм яҡындарына ҡарата һөйөү һәм хөрмәт тәрбиәләү, үҙ нәҫелен һәм шәжәрәһен белеү; ғаилә, нәҫел тураһында белемдәрҙе системалаштырыу маҡсатынан балалар баҡсаһы коллективы һәм ата-әсәләр менән берлектә эште ойоштороу.

Бурыстар:

1. Тәрбиәүи: Ғаиләлә бер-береңә ҡарата иғтибарлылыҡ, бер-береңә ярҙам, үҙ-ара хөрмәт хистәре тәрбиәләү;

2. Үҫтереүсе: Балаларҙың коммуникатив һәләтен, ижади активлығын үҫтереү, коллектив эштә ҡатнашыу теләге уятыу; балаларҙың һүҙлек запасын туғанлыҡ терминдары менән байытыу (ырыу, шәжәрә, генеалогик ағас, шәжәрә), балаларҙың һәм өлкәндәрҙең үҙ-ара аралашыу күнекмәләрен нығытыу;

3. Белем биреү: ғаилә тураһында күҙаллауҙы үҫтереү (уның үҙ тарихы һәм традициялары бар); «род», «шәжәрә» төшөнсәләрен асыу (ғаилә архивынан презентациялар, фотографиялар күрһәтеү), үҙ нәҫеленең тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм булған белемдәр менән уртаҡлашыу теләге уятыу; яҡындарға ҡәҙер-хөрмәт тәрбиәләү, балаларҙы нәҫел, нәҫел-ырыу, ғаилә тураһында мәҡәл-әйтемдәр, шиғырҙар, экиәттәр, әҙәби әҫәрҙәр менән таныштырыу; ата-әсәләр менән берлектә нәҫел ағасы, шәжәрә төҙөргә өйрәтеү.

**Йыһазландырыу**: Мультимедиа проекторы, ноутбук, слайдтар, ғаилә, нәҫел темаһына арналған күргәҙмә, шиғырҙар, видеояҙмалар, аудиояҙмалар.

**Эш алымдары**: әңгәмә, дидактик уйындар, һүрәт яһау, әҙәби әҫәрҙәр яттан һөйләү, йыр, бейеү өйрәнеү.

Алдан уҡ эшләнгән эштәр: Индивидуаль әңгәмәләр, ғаилә тураһында һөйләргә өйрәнеү, шиғырҙар, әкиәттәр өйрәнеү.

*Ҡаршы алыу.*

Байрам бөгөн беҙҙә, ишек асыҡ,
Ҡунаҡ булып түрҙән үтегеҙ!
Беҙ бит һеҙҙе ҡаршыларға сыҡтыҡ,
Байрамыбыҙға “рәхим итегеҙ!”

Ҡунаҡсылыҡ беҙҙең ҡаныбыҙҙа,
Ил хәстәре беҙҙең уйҙарҙа,
Ауыҙ итегеҙ бауырһаҡ,
Ҡымыҙ менән ҡулдарҙан.

*Йыр "Исәнмесез!"*
*Йыр "Сәләм, Айҙарғәли!"*
*Гармун көйө. Сәхнә биҙәлгән.*
*Ағас өй макеты. Презентация күрһәтелә.*

*Алып барыусы*
Беҙҙең яҡтар боронғонан урман булған,
Кейек йәндәр урмандарҙа мыжлап торған.
Нигеҙ ташын Айҙарғәли бабай шунда һалған,
Уның исемен һаҡлап  ауыл ҡалған.

*Айҙарғәли бабай улын эйәртеп сыға.* Милли костюмда, башында түбәтәй, аяғында – ситек, ир бала ла милли кейем кейгән.

*Айҙарғәли бабай:* Улым, ни тиклем ерҙәр үттек, күпме һыуҙар кистек, ошо урындан да хозур урын тапманыҡ. Ошо урынды төйәк итәйек. Был урын шишмәләргә, урмандарға, йәнлектәргә лә бай, һунарсылыҡ менән шөғөлләнербеҙ, малдар аҫрарбыҙ, иген үҫтерербеҙ.

*Уҡыусы:* Урал буйҙары һикәлтә, киртләс,
Беҙҙең төйәктең әсәһе булған.

Тулҡынланып аҡҡан Тәтер буйҙарына
Халыҡтарҙы туплап йыйнаған.
Йөрәктәрҙен түрендә
Урын алған ер бит ул.
Туған төбәк булыр ереӊ
Ер шарында бер бит ул.

*Айҙаргәли (улына):* Тормош итер нигеҙебеҙҙеӊ ташын ошо йәш имән ағасы янына һалайык.

*Бала*: Ә нимәгә ағас янына?

*Айҙаргәли бабай:* Улым, иғтибар ит әле, был йәш үҫенте һинеӊ буйлыҡ ҡына. Йылдар үтер, был имән ағасы ла һеҙҙеӊ менән бергә үҫәр, беҙҙеӊ шәжәрәнеӊ нәҫел ағасы булыр.

*Бала*: Нимә һуӊ ул шәжәрә?

*Айҙаргәли бабай:* Шәжәрә ғәрәп теленән ағас тигәнде аӊлата. Борон заманда беҙҙен олатайҙар, туған-нәҫелде, ата-бабаларҙан исемдәрен ағас рәүешендә тармаҡландырып яҙа барған. Нәҫел – бер үк бабайҙан килә торған кешеләр быуыны. Ағастыӊ тамырҙары – олатайҙар, ботаҡтары – атайҙар, япраҡтары – балалар. Атай-олатайҙар исемдәрен онотма, үҙ балаларыӊа ла өйрәт, нәҫелебеҙ тамырҙары юғалмаһын.

*Бала*: Һүҙ бирәм, атай, нәҫел шәжәрәһен дауам итәрбеҙ.

*Айҙаргәли бабай*

Яӊылышманым һайлап был урынды,
Мин ҡабыҙған усаҡ һүнмәһен.
Шишмәләрҙеӊ һыуы һайыҡмаһын,
Минеӊ халҡым йәшәй, үлмәгән!
Минеӊ һыҙған тәүге бураҙнала,
Оноҡтарым икмәк үҫтерә.
Ғасырларҙан килгән көслө быуын
Хеҙмәт менән йәшәп көн күрер.
Мин бәхетле! Һеҙҙеӊ быуын аша,
Киләсәккә бара, алдынғы.
Эш һәм хеҙмәт, йыр һәм бейеү аша,
Нәҫелдәрҙеӊ ебе ялғана.

*Айҙарғәли бабай:* Былай булғас күңелем тыныс киләсәк быуындар өсөн.

*Алып барыусы*:

Ата-бабаларҙың аманатын
Күҙ ҡараһы кеүек һаҡлайыҡ.
Ауылыбыҙҙы төйәк иткәндәрҙең
Ышанысын беҙ ҙә аҡлайыҡ.

*Йыр "Минең Ватаным".*

*Алып барыусы*: Нәҫел тарихы – ғаилә тарихы ла. Ғаилә – ил тоткаһы, татыу ғаиләләребеҙ күберәк булған һайын, ауылыбыҙ тормошо йәмлерәк була.

Ғаилә – ул иң оло таянысыбыҙ, иң ышаныслы һыйыныр урыныбыҙ. Унда бер-береһен яратҡан, бер-береһе тураһында хәстәрлек күрһәткән кешеләр йәшәй. Ниндәй генә булмаһын, кеше үҙенең ғаилә ҡосағында ял итә, рухи көс һәм ҡеүәт йыя, күңелен бушатып, йән йәрәхәттәрен дауалай ала.

*Алып барыусы*: Балалар, һеҙҙең өсөн донъяла бик-бик яҡын, ҡәҙерле кешеләр бар. Кемдәр ул? (атай, әсәй). Дөрөҫ, атай, әсәй – иң яҡын, иң һөйөклө кешеләр!

*Өс матур һүҙ (Нәки Иҫәнбәт)*

-Әйт һин миңә матур өс һүҙ,
Уйлап әйт һин, бәбкәм!
-Мин яратҡан иң матур һүҙ,
Иң яҡын һүҙ – әсәйем!
Унан ҡалмай матур бер һүҙ,
Иң яҡын һүҙ – атайым!
Бергә әйтһәң иң матур һүҙ –
Әсәйем дә атайым!
Бар өсөнсө бик матур һүҙ
Ул матур һүҙ – илкәйем!
Унда был йорт, олатайҙар,
Илкәйем дә еркәйем!

*Алып барыусы*: Атай-әсәйҙәргә кем ғүмер биргән, кем наҙлап  үҫтергән, беләһеҙме? Өләсәй, олатай – ниндәй матур яңғырай был һүҙҙәр.

*Шигырь «Дәу энием» (Э. Бикчентаева)*

Әниемнен энисе әбием була минем,
Әби генә түгел ул, ул минем дәү энием.
Ак ефәктәй чәчләрен ул тарап куя үреп,
Чисталыкка өйрәнәм мин дә анардан күреп.
Тәмле ашлар пешерә, матур гөлләр үстерә,
Өебезнен нуры ул, барыбыздан олы ул.
Жылы оек, бияләй бәйли безгә көз житкәч.
Өйдә аны хәммәбез, яратабыз, сөябез:
Син бик кадерле безгә, озак яшә, диябез.

*Минең бабай (Э. Шәрифуллина)*

Минең бабам – капитан,
Һуғышта булып ҡайтҡан.
Күкрәк тулы ордендар,
Миҙалдар алып ҡайтҡан.
Беҙҙең илдә һәр бала
Шаярып-көлөп,
Хәүеф-хәтәр күрмәһен, тип йөрөһөн,
Тыныс ҡына үҫһен, тип.

*Алып барыусы*: Һәр кеше үҙенең ете быуынын белергә тейеш. Шул ваҡытта ғына кеше тыуған иленең, тыуған төбәгенең, үҙ йортоноң үткәнен, үҙ халҡының сығышын белә.

*Бала:*

Тыуған ерем – матур Айҙарәле ере:
Билдәле улдар, ҡыҙҙар биргән ер,
Атай-олатайҙар тыуған ер ул,
Минең тәүге аяҡ баҫҡан ер.

*Йыр "Тыуған илем – туган телем".*

*Алып барыусы*: Борон замандан беҙҙең ауыл халҡының төрлө кәсебе була. Сабата үреү, бийма баҫыу ҡатын-ҡыҙҙарҙың

төп кәсебе – шәл бәйләү. Кис менән өмәләргә йыйылғандар, мамыҡ эшләгәндәр, йырлап, бейеп күңел асҡандар.

*Бейеү «Шәл бәйләнем».*

*Йыр «Шәл бәйләнем» («Балкыш» ансамбле башкара).*

*Алып барыусы*: Бергә йыйылған ерҙә шаяртып та алғандар.

*Уйын "Түбәтәй".* Туп-туп түбәтәй, түбәм уҡалы, кемдә ҡала түбәтәй. (мәҡәл әйтә)

Ата-бабалы кеше – тамырлы кеше.

Ҡарама үҙенә – ҡара нәҫеленә.

Теле барҙың – иле бар.

Тыуған илем – тыуған өйөм.

Тыуған телем – иркә гөлөм.

Әсәй йорто – алтын бишек.

Тел ташты эретә.

Туғанына – һүҙ үтә.

Атай – шәкәр, әсәй – бал.

Туған төйәк бар ерҙә ярҙам бар.

*Алып барыусы:* Халҡыбыҙҙа элек-электән ырыу шәжәрәләрен ҡағыҙға теркәү ғәҙәте булған. Шәжәрәләр белеү, яҙып барыу – матур һәм боронғо ғөрөф-ғәҙәт. Улар аша кешеләр атай-олатайҙарының дауамы булыуҙарын төшөнгәндәр.

Үҙҙәренен нәҫел шәжәрәһе менән таныштырырға Бәҙретдиновтар ғаиләһен саҡырабыҙ сәхнәгә. *(презентация, татар өе)*

*Бала*: Мин Эльвина Бадретдинова булам, мина 6 яшь. Мин балалар бакчасына йөрим. Рәсем төшерергә яратам һәм биергә. Минем абыйларым бар, Артур һәм Тимур. Артур абыем Уфада укый, ул математиканы һәм компьютерны якшы белә. Тимур Стерлетамак шәһәрендә укый, ул электрик була. Мин абыйлар белән беренче буын булабыз.

Икенче буын мина иң кадерле кешеләр – әни белән әти.

Минем әтием Ильвер, ул бик акыллы, көчле. Ул бөтен эшкә дә оста: трактор белән печән чаба, жыя, безнең магазинга продуктылар алып кайта.

Әнием – Альбина. Ул бик сабыр, уңган, бар эшкә дә өлгерә, магазинда сату сатырга да, безгә тәмле азыклар пешерергә дә. Мин эти-әниемне бик яратам!

Өченче буын – безнен картәни белән картәтиләр.

Картэтибез Фәсхетдин күп еллар буе тимерче булып эшләгән. Алдынгы колхозчы булган. Күп грамоталар белән лаекланган. Картәниебез Халида колхозда алдынгы чөгендерче булган, малчылыкта бозаулар караган, сыерлар сауган, авылда депутат булып йөргән.

Әхнәф картәтиебез гомере буе малчылыкта эшләгән, ә икенче картәниебез Халидә мәктәптә жыештыручы булып эшләгән.

Дүртенче буын – картәтиләрнен эти-әниләре. Фасхетдин картәтинен әтисе Шарифулла, сугышта пулеметчик булган, бер тапкыр яраланып кайткач, янадан киткән. Анын сөйләве буенча бер тапкыр үлемнән чак калган (командиры белән разведкага киткәннәр дә, кайтуларына барсы да улеп ятканнар). Сугыштан ул исән-сау кайткан. Пима басучы булган. Олы картәнием Марфуга белән бик матур донья көткәннәр. 3 малай һәм 4 кыз устергәннәр. Халидә картәнинен әтисе Карамулла сугышка бара алмаган, сугышка кадәр колхоз басуларын агулаган чакта узе агуланып улеп киткән һәм зурәнием Минсылу бер узе 3 ул һәм бер кыз тәрбияләп устергән.

Ахнәф картәтинен әтисе Гайнетдин булган, ул сугышка китеп, анда улеп калган. Картәни Минзифа 3 бала белән ялгыз калган. Ана бик авыр булган, шуна күрә картәтием Ахнәф абыйсы Шайхетдин белән 4 класны бетергәч тә көту көтә башлаган.

Икенче картәнием Халидәнен әтисе Саитгали булган, ул 1941 елдан 1946 елга кадәр Затон бистәсендә трудармиядә

булган, ул анда тракторда эшләгән. Зур әни Накыя белән озак еллар бергә яшәгәннәр, 4 малай, бер кыз үстергәннәр.

Бишенче буын – Шарифулла картәтинен этисе Фәтхлислам булган, Карамулла картәтинең әтисе Юсуп булган. Гайнетдин картәтинен әтисе Сагетдин булган. Саитгали картәтинен әтисе Гәрәй булган.

Алтынчы буын – Фатхлисламнын этисе Бадретдин булган. Сәгыйтдиннын этисе – Шарафутдин.

Без үзебезнең бабаларыбыз белән горурланабыз. Алар үз һөнәрләрен тапканнар, бәхетле гаилә корганнар. Балаларын үстереп, тормышка аяк бастырганнар. Сугыш кырларына курыкмыйча атлаганнар, безнең бәхетле киләчәгебез өчен армый-талмый бил бөккәннәр.

*Йыр "Татыу ғаилә".*

*Алып барыусы.* Эйе, туғандарығыҙ күберәк булған һайын, шәжәрә ағасының ботағы күберәк була.

Айҙарәле ауылында күп милләтле халыҡ йәшәй. Татарҙар, башҡорттар, рустар үҙ-ара татыу йәшәйҙәр. Беҙҙең ауылға күсеп килгән ғаиләләр менән дә татыу йәшәйбеҙ. Уларҙың береһе – Сәмиғоловтар.

*Зал уртаһына Сәмиғоловтар ғаиләһе сыға. (презентацияла башҡорт өйө)*

Иҫәнмеһегеҙ. Мин – Сәмиғолова Зилә, үҙебеҙҙең нәҫел шәжәрәһе менән таныштырам.

Беҙ Айҙарәле ауылына күсенеп килдек. Балаҡатай районынан. Ауыл кешеләре беҙҙе яҡты йөҙ менән ҡабул иттеләр. Айҙарәле халҡы ярҙамсыл, бик яратып йәшәйбеҙ.

Өсәйем яғынан шәжәрәбеҙ Хапий бабайҙан башлана. Хапий ҡыҙы Гөлсибәр – минең әсәйем, колхозда һауынсы, хеҙмәт һөйгән, асыҡ йөҙлө ине. Атай – Сәмиғолов Ғәли. Улар Балаҡатай районында Медятово ауылында йәшәнеләр, атайым колхозда малсылыҡта хеҙмәт итте.

Беҙ дүрт бер туған: Юля, Анфиса, Гөлсинә һәм мин.

Беҙҙен ғаиләлә өс бала. Ҡыҙым Аделина 4-се синыфта уҡый, Айҙар улым балалар баҡсаһына йөрөй, улым Вильданға бары йәш ярым ғына. Аделина менән Айҙар ярҙамсыл булып үҫәләр, йәй көнө ҡаҙ бәбкәләрен һыу буйына ҡыуалар, баҡса үҫтерешәләр, иркәләрен уйнаталар. Бала саҡтан алып эш һөйәргә өйрәтәбеҙ.

Беҙ балаларыбыҙҙы яратабыҙ һәм ҡәҙерләйбеҙ. Балаларҙын бала сағы күңелле, матур булһын өсөн тырышабыҙ.

Аделина ҡыҙым һүрәт менән шөғөлләнә, Айҙар улым бейергә ярата.

*Башҡорт бейеүе. (С. Айҙар башҡара)*

*Алып барыусы:* «Ҡурай» уйыны уйнайбыҙ.

*Алып барыусы:* Үҙҙәренең шәжәрәһе менән Жилкиндар ғаиләһе таныштыра.

*Зал уртаһына Жилкин ғаиләһе сыға. (на презентации убранство русского дома)*

Меня зовут Света. Я хочу познакомить со своей родословной.

В Стерлибашевском царстве в Randomстародмитриевском государстве жили-были мужик да баба, звали их Никита и Акулина, а фамилия у них была Жилкины. А тебе они были прапрабабушка и прапрадедушка.

И были у них две доченьки: круглолицая да румяная Любонька и стройная как осинка Клавочка, да сынок маленький Митенька. Сестрицы выросли и вышли замуж. Любаша в стольный град Стерлитамак, а Клавушка в княжество Салаватское. А принц Дмитрий был помощником для родителей. Тут пришла пора и ему жениться, а невеста у него была умница да красавица, что ни в сказке сказать, ни пером описать. А звали ее Александра. Это, сынок, твои прадедушка и прабабушка.

Ровно через год и один день родился у них сыночек, и нарекли его Сереженькой. Но недолго молодой отец радовался своему счастью, страшную весть принес гонец, что напали на землю русскую силы темные. Оседлал Дмитрий своего любимого коня, сел на него и поскакал. Долго он бился с чужеземцами, целых 4 года и дошел до самого логова злодеев, города Берлина. Одержав победу, вернулся домой. На радостях, что сын вернулся жив и здоров, захотели родители Сереже братика подарить, и ровно через 9 месяцев, вот чудеса-то, родился мальчик, и нарекли его Володей. Рос он не по дням, а по часам. Настоящим богатырем вырос, это был твой дедушка.

А брат его старший Сергей уж перебрался в свой замок, который находился в Ишимбайском княжестве. Вместе с княгиней Ниной они растили белокурую дочку Светочку и мальчонка Славика.

Однажды Володя решил навестить брата, ускакал на коне за горы, за леса, но злая колдунья перепутала его пути и он заблудился. Три дня и три ночи скакал он по лесам, пока не почувствовал, что конь его занемог и остановился на водопой. И вдруг увидел, как навстречу ему с коромыслом идет девушка, красоты неописуемой, да так сразу и полюбил ее. А красавица-та оказалась кровей Стерлитамакских, и звали ее чудным именем Миннур. И это была твоя бабушка. Заслали родители сразу же сватов и сыграли веселую свадьбу. Молодые стали жить – поживать да детей наживать. Первенцем у них был Витенька, вскоре родилась и красивая дочурка с зелеными глазами и наипрекраснейшим именем Светлана. А поскребышем был мальчонка, имя ему дали Виталий. Маленькая Светлана была и умница, и помощница, пол подметет, воды принесет, блинов испечет. Вот выросла она и стали к ней свататься принцы разные со всех государств. И выбрала она себе принца по душе и вышла за него замуж. Родились у них три сына: старший сынок Сергунчик уж упорхнул из родительского гнезда в стольный град Стерлитамак, своей жизнью живет. Средний

Богдан, помощник мой во всем. И посуду помоет и за младшим братиком Романом присмотрит, спать его уложит.

Вот такая сказка, про людей родных да любимых! Сказка семьи нашей продолжится, а нам пора заканчивать…

Вот и сказке конец, а кто слушал молодец!

Наши корни – семья, как исток у реки
Это крепость твоя, говорят старики.
И отец говорил, повторяла мне мать,
Чтоб я род сохранил, стал его продолжать.
Без семьи не прожить, человеком не стать,
Нужно жить и любить и детей воспитать.
Посадить деревце, так же выстроить дом,
Помнить слово отцов – сила Родины в нём.
*Частушки. Жилкина Света с сыном.*
*Песня «Моя семья»*

*Алып барыусы:* Әһлиуллиндар ғаиләһен сәхнәгә саҡырабыҙ.

Исәнмесез: Минем исемем Әһлиуллина Әлия. Мин үзебезнең нәсел шәҗәрәсе белән таныштырам. *(презентатцияда татар өе)*

Борон булган Әһлиулла,
Аңардан тыуа өч ул:
Хайрулла, Шарифулла, Хисматулла.
Хайрулладан туа Гыйбадулла,
Шушы җирдә төпләнеп,
Матурлап донъя кора.
Гыйбадулладан тыуа тагы
Рәхим, Габсамат, Рәйсә.
Яу кырында хәбәрсез
Югалган хәбәр килә.
Балаларын кочаклап,
Ятим кала Ракыя.

Заман авырлыгына бирешмичә
Араны давам итә.
Габсаматта өч бала
Шәҗәрә җибен сутә.
Минияз, Рәил, Рәйлә,
Минияздан – Эдуард,
Ленар, Эльвина.
Әһлиуллинар гөмер бирә
Үзләре биш балага.
Шәжәрә жебен ялгап
Туа Редик улыбыз,
Сабыр, зирәк ул бала,
Картәтисеннән өйрәнеп
Агач остасы була.
Тормышны ямьләндереп
Кызыбыз Рузалина туа якты доньяга.
Гел елмая, шат күнелле, зур ярдымче ул мина,
Иркәләрен караша, савыт-саба юыша.
Дилара – икенче кызым,
Бәләкәйдән мавыга сәхнәдә бию белән,
Өченче кызыбыз – Ильнара,
Укый беренче класта,
Апаларыннан калышмый,
Житез ул төрле якка.
Нәсел давамчысы булсын дип,
Алып кайттык Ильмирны.
Сутеп беттек нәсел жебен,
Давамчысы табылды.
*Татарса бейеү «Әпипә».*
*Флеш-моб «Туган як».*
*Алып барыусы*: Хәтерләүҙән ҡурҡма һин!
Үткәнеңде онотма һин!
Бел һин олатайҙарҙың
Нисек итеп көн иткәнен.

Ни иккәнен, ни сиккәнен,
Ниндәй уйҙар, ниндәй моңдар
Беҙҙә ҡалдырып киткәнен.
*Йыр "Шәжәрә".*
*Алып барыусы:* Ҡунаҡтарға һүҙ бирелә.
Сара тамамлана.

**Заһиҙуллина Г.Н.**
Стәрлебаш ауылы 4-се балалар баҡсаһы МБМЙББУ

**“БАШҠОРТОСТАН – ДУҪЛЫҠ ИЛЕ,**
**ҺӘР МИЛЛӘТ УНЫҢ ГӨЛӨ!”**
**(**Өлкәндәр төркөмө өсөн)

**Видеозаставка “Беҙ балаларың һинең, Башҡортостан!!!”**
**Вход – танец с полотнами.**

**Йыр “Әссәләмәғәләйкүм”**
**Алып барыусы:**
Тыуған илем, тим дә һүҙ башлайым,
Тыуған илем – Башҡортостаным!
Уны ҙурлап тик бер һүҙ әйткәндә,
Әйләнәмен һайрар ҡошҡа мин.
Башҡортостан тыуған ерем минең,
Тирмә-тирмә һинең тауҙарың,
Шул тауҙарҙы алтын-көмөш итер,
Туған халҡың еңер дошманын.
Хөрмәтле балалар, тәрбиәселәр, ҡунаҡтар, бөгөн беҙ һеҙҙең менән күркәм байрамға йыйылдыҡ. Ул беҙҙең тыуған, йәшәгән еребеҙгә, Башҡортостан Республикаһына бағышлана һәм дуҫлыҡ, татыулаҡҡа арнала.
**Все вместе:**
Башҡортостан – шатлыҡ иле,

Башҡортостан – сафлыҡ иле

Башҡортостан милләт-ара

Мәңге һүнмәҫ дуҫлыҡ иле. (В записи звучит гимн РБ)

**Алып барыусы:** Башҡортостаныбыҙ – сәскәләр гөлләмәһе кеүек төрлө милләткә бай төбәк. Унда башҡорттар ҙа, татарҙар ҙа, урыҫтар ҙа, мариҙар ҙа, удмурттар ҙа, мордвалар ҙа һәм башҡа халыҡтар дуҫ-татыу ғүмер итә. Улар бер ғаилә булып, дуҫлыҡтың ҡәҙерен белеп, ауыр саҡтарҙа бер-береһенә ярҙам итеп, уңыштарын, шатлыҡ һәм ҡайғы-хәсрәттәрен уртаҡлашып йәшәргә күнеккән.

**2-се бала**:

Төрлө милләт балалары

Йыйылған бер ергә.

Бөтәһе лә тигеҙ баҫа

Оҫта улар бейергә.

**3-сө бала:**

Бик дуҫ улар, бик тапҡырҙар,

Һүҙ әйтерлек түгелдәр.

Шулай бергә йәшәгәнгә

Шат була бит күңелдәр.

*Бейеү "Дуҫлыҡ".*

**Алып барыусы:** Башҡортостан Рәсәй Федерацияһында бәләкәй генә ҡайын япрағы кеүек тора. Уның тураһында башҡорт халҡының бөйөк яҙыусыһы Мостай Кәрим шиғырында ошондай юлдар бар:

**4-се бала**

Взгляни на глобус:

Вот он – шар земной,

На нем Башкирия

С березовый листок величиной.

Всего лишь навсего

Не больше

Обыкновенного листка,
Береза же – великая Россия –
Так зелена, так высока!

**5-се бала**

Я у карты Родины стою,
Узнаю Башкирию свою.
Мне она напоминает руку,
А вернее, крепкую ладонь,
Искренне протянутую другу,
За друзей готовую в огонь.

**Алып барыусы:**

Ә ниңә Башҡортостан тип атағандар беҙҙең еребеҙҙе? (Балаларҙың яуаптары) Башҡортостан – башҡорттар иле тигән һүҙ. Бында борон-борондан башҡорттар йәшәгән һәм йәшәй.

**Слайды**

**Алып барыусы:** Беҙҙең еребеҙ бик ҙур һәм бай. Башҡортостанда күккә ашҡан бик ҙур тауҙар ҙа, ҡара урмандар ҙа күп, далалар ҙа бар. Ағиҙел, Һаҡмар, Дим һ.б. йылғаларҙың матурлығы тураһында халыҡ бик күп төрлө йырҙар сығарған. Асылыкүл, Яҡтыкүл – үҙҙәре генә ни тора! Һоҡландырғыс Урал тауҙары, Башҡортостандың көслө-көслө батырҙары тураһында халыҡ бәйеттәр сығарған, шиғырҙар, йырҙар яҙған.

**6-сы бала**

Башкортостан – мой край родной,
Горжусь и радуюсь тобой!
Твои долины, реки и поля –
Все это ты, любимая земля!

**7-се бала**

У наших гор вершины до небес,
И соловьиных песен полон лес.
Богаты недра нефтью, серебром,
Поляны – ягодами, а сердца – добром.

**8-се бала**

Там Агидель несется с горных круч.

Поток её прозрачен и могуч.
К великой Волге путь её лежит.
Бегут года и Агидель бежит.
**9-сы бала**
Мы – дети Родины своей,
своей большой страны.
Мы всех счастливей, всех сильней,
Покуда вместе мы!

*Йыр “Ватаным”.*

**Алып барыусы:** Ә Башҡортостандың баш ҡалаһы ниндәй ҡала? Дөрөҫ, Өфө ҡалаһы.

**10-сы бала**
Как люблю тебя, Уфа,
Ты – моя столица,
И красива, и стройна,
Мы с тобой гордимся.

**Алып барыусы:** Ә кемегеҙ әйтә, беҙҙең республикабыҙҙың башлығы кем? Был һүрәттә нимә төшөрөлгән (Башҡортостан гербы һәм флагы). Ә был һүрәттә (С. Юлаев). Кем ул С. Юлаев? (халыҡ геройы, шағир, көрәшсе).

**11-се бала**
Герб Башкортостана
В детском саду на стене:
Салават Юлаев
На лихом коне.
Солнце освещает,
И герой народный
К миру призывает.
Будущее счастье,
Вечная свобода –
Вот мечты сэсэна

И его народа.

**Алып барыусы:** Ә хәҙер, балалар, беҙ үҙебеҙҙең республикабыҙҙың гимнын тыңлап үтәсәкбеҙ. Гимныбыҙҙы матур итеп баҫып тыңлайыҡ.

*Гимн уйнай. Балалар һәм өлкәндәр гимнды баҫып тыңлайҙар.*

**Алып барыусы:** Беҙҙең башҡорт халҡы шиғырҙарҙа, йырҙарҙа ғына түгел, ә уйындарҙа ла үҙенең батырҙарының данын күтәргән.

*Уйындар "Етеҙ егеттәр", "Беҙ ун ике ҡыҙ инек", "Йәшерәм яулыҡ".*

**Алып барыусы:** Әйтегеҙ әле, балалар, Башҡортостанда ниндәй ҡалалар бар?

**Балалар**: Күмертау, Салауат, Ишембай, Белорет, Сибай, Бәләбәй һ.б.

**Алып барыусы:** Балалар, беҙ йәшәгән ауылыбыҙҙың исеме нисек? Башҡортостандың ниндәй районында йәшәбеҙ? Ниндәй йылғалар аға Стәрлебаш районында?

**12-се бала**

Стәрлебашта эшсән халыҡ,
Юҡтыр ул башҡа яҡта.
Үлән үҫмәгән тау-ташта
Урман үҫтерҙе хатта.
Стәрлебашым – һин юлдашым,
Беҙ бергә, мәңге бергә.
Стәрлебашым – йөҙөк ҡашым,
Йөрәгемдә һин генә.

**Алып барыусы:** Беҙҙең районда ниндәй милләт халҡы йәшәй? (татар, башҡорт, урыҫ, сыуаш, латыш һ.б.). Дөрөҫ, балалар. Ошо халыҡ араһында иң күбе башҡорт һәм татар милләттәре.

**13-сө бала**

Татарҙар һәм башҡорттар,
Оҡшаш беҙҙә телдәр, ғәҙәттәр.
Тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ сәскә атһын
Уртаҡ беҙҙең ерҙә теләктәр.
*Бейеү "Ҡурай".*

**Алып барыусы:** Хөрмәтле дуҫтар, бөгөн дуҫлыҡҡа, татыулыҡҡа, берҙәмлеккә бағышланған байрамыбыҙ аҙағына ла яҡынлашты. Шулай, бергә-бергә йәшәргә яҙһын, тыуған илебеҙ Башҡортостаныбыҙҙа бер-беребеҙҙе хөрмәтләп, дуҫ йәшәйек.

Киләһе осрашҡанға тиклем. Һау булығыҙ!

*Йыр "Яратығыҙ".*

**Заһиҙуллина Г.Н.**
Стәрлебаш ауылы 4-се балалар баҡсаһы МБМЙББУ

## "ҠАРҒА БУТҠАНЫ» БАЙРАМЫ

(Өлкәндәр төркөмөндә башҡортса телмәр үҫтереү буйынса белем биреү эшмәкәрлеге)

**Маҡсат:** Балаларҙы «Ҡарға бутҡаһы» фольклор байрамы менән таныштырыу, башҡорт халҡының мәҙәниәтен, уйындарын өйрәнеүҙе дауам итеү.

**Бурыстар:** Башҡорт халҡының боронғо йолаларына, традицияларына, мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу, тирә-яҡ мөхиткә һөйөү һәм һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү; халыҡтың милли байрамдары тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү; балаларҙың хәтерен, иғтибарын, логик фекерләүен, телмәрен үҫтереү; балаларҙа байрам кәйефе, күңел күтәренкелеге, үҙ-ара дуҫтарса мөнәсәбәт булдырыу.

**Материал:** йорт макеты, ҡарғалар костюмы, ҡаҙан, кәрзин, аҙык-түлек, усаҡ имитацияһы, сигеүле таҫтамалдар, һуғылған балаҫ, ашъяулыҡтар.

**Сара барышы**

**Залға балалар килеп инә.**

**Тәрбиәсе:** Һаумыһығыҙ, балалар!

**Балалар:** Һаумыһығыҙ!

Һаумы, алтын ҡояшым! (*кулдар менән түңәрәк яһау*)

Һаумы, зәп-зәңгәр күгем! (*кулдарҙы болғау*)

Иҫәнме һин, елкәйем, (*биткә ел елпеү*)

Бөтәгеҙҙе сәләмләйем! (*кулдарҙы кыҫыу*)



**Тәрбиәсе:** Асылды аҡ ҡалын юрған,

Иҫте апрель елдәре.

Ҡоштар ҡайта. Һағындырған

Тыуған-үҫкән ерҙәрҙе.

Көндәрен юлда үткәреп,

Ҡыуанышып осалар,

Ҡанаттарына күтәреп,
Яҙ килтерә бит улар.




**«Яҙ килде» йыры**

**Ҡарға булып кейенгән ике бала килеп инә.**

1. Ҡарға әйтә: «Ҡар-р! Ҡар-р!
Туйым етте бар, бар.
Ҡар-р! Ҡар-р! Ҡар-р».
2. «Ҡар-р! Ҡар-р! Ҡар-р!
Яҙ етте, балалар!
Матур байрам көнөндә
Барыһы ла күңел асалар».

**Тәрбиәсе**: Эйе, бына ҡарға туйын үткәрер ваҡыт та етте. Борон-борон заманда кешеләр ни өсөн яҙ булғанын белмәгәндәр, ти. Улар яҙҙы йылы яҡтан ҡара ҡарғалар алып килә, тип уйлаған. Шуның өсөн ҡарғалар килеү менән, байрам яһай торған булғандар. Уны «Ҡарға бутҡаһы» тип атағандар. Яланда уйнағандар, йырлағандар, күңел асҡандар, бутҡа бешергәндәр. Ҡарғаларҙы ла бутҡа менән һыйлағандар. Әйҙәгеҙ беҙ ҙә өйҙән-өйгә йөрөп, дуҫтарҙы саҡырайыҡ, һый-хөрмәт йыяйыҡ. Балалар, әйҙәгеҙ!

**Балалар зал буйлап атлай. Башҡортса көй яңғырай.**

**1-се өй янына баралар.**

**Балалар:** Өйҙәме, түтәй?

Тиҙерәк бир күкәй.

Бирһәң беҙгә өс күкәй,

Тауығың һалыр йөҙ күкәй.

Май кәрәк, ярма кәрәк,

Ҡарға туйына барыһы ла кәрәк.

**Әбей** (йомортҡа, ярма алып сыға):

Бына, балалар, йомортҡа ла бар, ярма ла бар.

**Тәрбиәсе:** Рәхмәт, әбей. Беҙҙә бөгөн ҡарға бутҡаһы, әйҙә беҙҙең менән яланға.

**Әбей:** Рәхмәт! Барам, барам. Бергәләп күңел асып ҡайтырбыҙ.

**Икенсе өйгә киләләр.**

**Балалар:** Онoң булһа, он сығар,

Шәкәр кәрәк, тоҙ кәрәк,

Сығар, бабай, тиҙерәк.

Һинең кеүек уңған бабай

Был донъяла бик һирәк.

**Бабай сыға:** Бына, балалар, шәкәр ҙә бар, тоҙ ҙа бар. Байрамығыҙ күңелле үтһен!

**Тәрбиәсе:** Беҙҙе һөйөндөрөүең өсөн хоҙай үҙеңде һөйөндөрһөн! Бабай, әйҙә беҙҙең менән ҡарға бутҡаһына!

**Бабай:** Рәхмәт! Барам, әйҙәгеҙ балалар!

**Башҡорт көйө яңғырай. Балалар зал буйлап атлай.**

**Тәрбиәсе:** Бына беҙ Ҡарға бутҡаһы үткәрелә торған яланға килеп тә еттек.

**Әбей:** Эйе, иҫән-имен булғас, тағы бер йыл үтте, ҡарғалар ҡайтып, ҡарҙар иреп, ҡара ергә баҫыр көн етте.

**Бабай:** Инде һуғыштар булмаһын, илдәр тыныс торһон!

**Тәрбиәсе:** Барыбыҙға ла иҫән-һау ғүмер итергә яҙһын! Теләктәребеҙ ҡабул булһын өсөн ҡайын ағасына таҫмалар тағайыҡ, теләктәрҙең изгеләрен теләйек!

**Балалар сығып, ағасҡа таҫмалар таға**.

**Тәрбиәсе:** Сылтырашып торһондар,

Елберҙәшеп торһондар,

Беҙҙе иҫләп торһондар,

Яман күҙҙән һаҡлаһындар,

Татыулыҡты маҡтаһындар,

Ғәҙеллекте яҡлаһындар,

Именлек теләһендәр**.**

**Әбей менән бабай:** Балалар, ярма ла бар, май ҙа бар, тоҙшәкәр ҙә бар. Бутҡа бешерергә ҡыҙҙар менән малайҙар йылғанан һыу ҙа алып менһәләр?! Йылға һыуы менән бутҡа бик тәмле була.

**Тәрбиәсе:** Хәҙер беҙҙең ҡыҙҙар менән малайҙар һыу алып килерҙәр.

**«Һыу юлы» бейеүе.**

**Бабай:** Һай, афарин, балалар! Бына һыу ҙа булды.

**Әбей:** Беҙ бутҡаны бешерергә ҡуйырбыҙ, ә һеҙ күңел асып уйнап алығыҙ.

**Тәрбиәсе:** Ҡыҙҙар, малайҙар, әйҙәгеҙ, «Тирмә» уйынын уйнап алайыҡ».

**«Тирмә» уйыны.**

**Тәрбиәсе:** Ә хәҙер беҙҙең ҡыҙҙар бейеп алһындар.

**«Сынаяҡ» бейеүе.**

**Бабай:** Эй, балалар, нисек матур итеп күңел асалар! Беҙ ҙә һелкенеп алайыҡ әле.

**Әбей:**

Бейе, бейе, Хәйбулла,
Бейегән кеше бай була,
Бейегән кеше өҫтәлендә
Икмәк менән май була**.**

**Бабай:**

Бейе, бейе, оҫтараҡ
Бер аяғың ҡыҫҡараҡ,
Ике аяғың берҙәй булһа,

Бейер инең оҫтараҡ.

**Әбей менән бабай бейей, балалар ҡул сабып тора.**

**Бабай:** Бик шәп итеп бейеп тә алдыҡ, күңелдәр күтәрелеп китте. Балалар, бутҡа тиҙҙән бешер ҙә инде.

**Әбей:** Беҙ йәш саҡта ниндәй уйындар уйнай инек әле? Бутҡа бешкәнсе балаларҙы уйнатып та алайыҡ.

**Бабай:** «Беҙ, беҙ, беҙ инек», «Йөҙөк ҡашы», «Яулыҡ һалыш» уйындарын уйнап үҫтек.

**Әбей:** Әйҙәгеҙ, «Яулыҡ һалыш» уйынын уйнайыҡ.

**«Яулыҡ һалыш» уйыны.**




**Әбей**: Һеҙҙең менән күңелле. Бутҡа көйөп китмәһен, ҡарап киләйек әле, бабай!

*«Бутҡа бешә» торған ергә барып бутҡаны тәмләп ҡарайҙар.*

**Тәрбиәсе:** Ҡапыл ғына һыуыҡ булып китте, ҡояш та болот артына инеп ҡасты, ямғыр тамсылаған кеүек. Әйҙәгеҙ әле, ямғырҙы туҡтатайыҡ.

**Балалар:** Ямғырҡайым, тукта,



Яуаһың бит юҡҡа.

Ямғырҡайым, туҡта,

Ҡайт та ятып йоҡла.

**Тәрбиәсе:** Ә хәҙер әйҙәгеҙ ҡояшты саҡырайыҡ.

**Балалар:** Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,

Майлы бутҡа бирермен,

Майлы бутҡа ҡаҙанда,

Тәтәй ҡашыҡ баҙарҙа!

**Тәрбиәсе:** Бына ҡояш та сыҡты, күңелдәр күтәрелде, тағы ла йырлағы, бейеге, уйнағы килеп китте. Ниндәй рәхәт!

Балалар, ҡоштар кеүек ҡанат елпеп әйҙәгеҙ, беҙ «Осто, осто...» уйынын уйнап алайыҡ. Уйындың ҡағиҙәләрен боҙмайыҡ!

**«Осто, осто...» уйыны.**

**Ҡарғалар осоп инә:** Бутҡа беште, бутҡа беште! Ҡар-р, ҡар-р, ҡар-р!

**Башҡорт көйө яңғырай.**

Әбей менән бабай бутҡаны ҡаҙаны менән зал уртаһына алып сығалар, барыһы бергә табын әҙерләй.

Бутҡа ашайҙар. Ҡарғаларҙы ла бутҡа менән һыйлайҙар. Изге теләктәр теләйҙәр.



**Норова Л.А.**
Первомайский ауылы балалар баҡсаһы МЙББУ тәрбиәсеһе

## "ТЫУҒАН ЯҒЫМ – БАШҠОРТОСТАН"

(Республика көнөнә арналған сара сценарийы)

**Маҡсат:**

1) балаларҙы Башҡортостан Республикаһының символикаһы менән таныштырыу;

2) йомаҡтар аша балаларҙың фекерләү ҡеүәһен, телмәрен үҫтереү;

3) тыуған илде һөйөргә, ҡәҙерләргә һәм уның менән ғорурлана белергә өйрәтеү.

**Сара барышы**

**Тәрбиәсе**: Балалар, беҙгә бөгөн ҡунаҡтар килде, әйҙәгеҙ, улар менән иҫәнләшеп китәйек, үҙебеҙҙең яҡшы кәйефтәребеҙ менән бүлешәйек.

*Балалар түңәрәккә тора һәм бер-береһен сәләмләй.*

**Тәрбиәсе**: балалар, ултырғыстарға ултырабыҙ. Маргарита беҙгә хәҙер шиғыр һөйләр, ә беҙ һеҙҙең менән ошо шиғыр аша дәрестең темаһын билдәләрбеҙ.

**Маргарита шиғыр һөйләй.**

**Тәрбиәсе**: Балалар, беҙ һеҙҙең менән бөгөн нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?

Һәр бер кешенең тыуып үҫкән тыуған ере бар. Ә беҙҙең тыуған еребеҙ нисек атала?

*Балаларҙың яуаптары.*

**Балалар**: Башҡортостан.

**Тәрбиәсе**: Эйе, балалар, беҙ һеҙҙең менән Башҡортостанда йәшәйбеҙ, был ер – беҙҙең тыуып үҫкән еребеҙ ул. Башҡортостан үҙенең тыуған көнөн ҡасан билдәләй икән? Башҡортостан үҙенең тыуған көнөн көҙ көнө мул уңыш алған ваҡытта билдәләй. Мин һеҙгә бөгөн Башҡортостандың нисек барлыҡҡа килеүе хаҡында легенда һөйләп китмәксемен. Тыңлағыҙ.

«Борон-борон заманда бер күсмә халыҡ урманһыҙ, ерһеҙ ерҙә донъя көткән.

Улар бай тәбиғәтле, бәшмәкле, еләкле, балыҡлы ер тураһында хыялланған. Бер заман китеп барһалар, бүре көтөүенә тап булғандар. Бүренең хужаһы кешеләрҙән: «Һеҙ ҡайҙа китеп бараһығыҙ?» – тип һораған, ә улар бай ер эҙләүҙәре тураһында һөйләгән. Бүре көтөүе уларҙы бик бай ергә алып барған. Улар ошо ерҙе Башҡортостан тип атаған. Баш – *главный*, ҡорт – *волк*, ә үҙҙәрен башҡорттар тип атағандар».

**Тәрбиәсе**: Афарин, балалар! Хәҙер урындарға ултырыштыҡ. Мин һеҙгә йомаҡ әйтәм, һеҙ иғтибар менән тыңлап ултырығыҙ, дөрөҫ яуапты табығыҙ:

Ҡош тауышын, иртәнге моңдо
Ошо көпшә тарата.
Юҡ уның теле, һүҙе,
Әммә барыһын да үҙенә ул ҡарата.

*Балаларҙың яуаптары.*

**Балалар:** Ҡурай.

**Тәрбиәсе:** Эйе, дөрөҫ, ул – ҡурай. Ҡурай – ул башҡорттарҙың милли музыка ҡоралы. Ҡурай оҙон ағас үләндән эшләнә. Үләндең ике осон ҡырҡып, оҙон нәҙек торба яһайҙар. Ҡурайҙың эсе буш, тишектәре бар. Ҡурайҙы ауыҙға алып, эсенә өрәләр, ә бармаҡтар менән тишектәренә бер-бер артлы баҫалар. Ҡурайға өрһәң, көй сыға. Ҡурай уйнаған кешенең тыны оҙон булырға тейеш. Уның өсөн көн дә күнекмәләр эшләү кәрәк.

*Ҡурай тураһында шиғыр тыңлайыҡ.*

Уйна, Ҡурайҡайым, күңел наҙла,
Таң ҡалһын тау, урман, далаһы!
Маҡтап данла сал Уралым илен
Ҡурай тартсы, башҡорт балаһы!

**Тәрбиәсе** (ҡурай макетын күрһәтә): Бөгөн беҙгә ҡунаҡҡа Алһыу менән Исмәғил килгән. Улар буш килмәгән. Улар плакатҡа ҡурай сәскәһе төшөрөлгән һүрәт алып килгән.

- Балалар, плакатҡа нимә төшөрөлгән?

**Балалар**: ҡурай сәскәһе.

**Тәрбиәсе:** Эйе, ҡурай сәскәһе. Ул Башҡортостанда үҫә. Ҡурай – ул Башҡортостандың эмблемаһы, беҙҙең республиканың визит карточкаһы. Ҡурай матур булһын өсөн, беҙгә бер нисә һорауға яуап бирергә кәрәк.

- Ҡурайҙың нисә тажы бар?
- Һәр бер тажда һорау йәшерелгән. Эйҙәгеҙ, ҡарайыҡ! Беренсе тажды өҙөп алабыҙ. Унда нимә һүрәтләнгән икән?

**Балалар:** Флаг.

**Тәрбиәсе:** Флагта ниндәй төҫтәр күрәһегеҙ?

**Балалар:** Күк, аҡ, йәшел.

**Тәрбиәсе:** Был төҫтәр нимәне аңлата? Дөрөҫ: күк төҫө – һауаны, аҡ төҫ – дуҫлыҡты, йәшел – үләнде, ерҙәге йәшәүҙе аңлата! Әйҙәгеҙ әле флаг тураһында да шиғыр тыңлайыҡ!

*Флаг тураһында шиғыр һөйләнелә.*

**Тәрбиәсе:** Балалар, әйҙәгеҙ ошо ҡағыҙ киҫәктәренән Башҡортостандың флагын төҙөйөк. Афарин!!!

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ әле ҡурайҙың икенсе тажына нимә йәшеренгән икәнен ҡарайыҡ!

*Башҡортостан Республикаһының символдарын әйтәләр. Балаларҙың яуабы: гимн, герб, флаг, ҡурай.*

**Тәрбиәсе:** Балалар, республика гимнын нисек тыңлайҙар (*яуаптар әйтелә*). Дөрөҫ, гимнды баҫып тыңлайҙар.

**Тәрбиәсе:** (*3-сө тажды ала*). Бында йомаҡ йәшеренгән, йомаҡты тыңлайбыҙ:

Ул ҡанаттарын йәйгән,
Аҡ сәскәһен ябынған,
Йәшел үләндән кәбән ҡойған,
Түбәһен асыҡ ҡалдырған!

**Балалар:** Тирмә.

**Тәрбиәсе:** Нимә ул тирмә? Дөрөҫ, ул башҡорттарҙың йәшәгән урыны. Элек башҡорттар малсылыҡ менән шөғөлләнгән, улар һыйыр, ат, һарыҡ тотҡан. Йәй көнө улар яланда, ҡырҙа йәшәгән, күсеп йөрөгәндәр. Шуның өсөн уларҙы күсмә халыҡ тип йөрөткәндәр. Йәйен яланда мал аҫрап йәшәр

өсөн уларға өй кәрәк булған. Ул тирмә тип аталған. Тирмәне нимәнән эшләгәндәр? (Тиренән). Тирмәнең башынан бәләкәй генә тишек, мөрйәгә урын ҡалдырғандар, иҙәне ер булған. Иҙәненә ҡалын аҫалы балаҫ йәйгәндәр.

**«Айырмаһын тап» уйыны**

*(балалар тирмә һәм ағас өйҙөң айырмаһын әйтәләр)*

**Тәрбиәсе:** Дүртенсе тажда ниндәй һорау булыр? Бында беҙгә башҡорт халыҡ уйыны «Тирмә»не уйнарға ҡушылған. Сөнки Башҡорт халҡы эштән һуң, күңелле итеп ял итергә яратҡан. *(«Тирмә» уйыны)*

**Тәрбиәсе:** Бишенсе тажды ҡарайбыҙ. Бында шундай һорау яҙылған: Башҡортостандың баш ҡалаһы әйтегеҙ! *(Балалар яуап бирә)*

**Тәрбиәсе:** Африн! Хәҙер Өфө тураһында беҙгә Ильяс шиғыр һөйләй.

**Тәрбиәсе:** Алтынсы тажды асайыҡ. Бында шундай һорау бирелгән: Башҡортостан гербында кем төшөрөлгән? *(Балалар яуап бирә)*

**Тәрбиәсе:** Аҙаҡҡы таж ҡалды – етенсе таж. Беҙҙен тыуған илебеҙ – Башҡортостаныбыҙ бик бай һәм матур! Ул тауҙарға, урмандарға, күлдәргә бик бай. Иң ҙур байлыҡ – ул беҙҙең халыҡ. Әйтегеҙ әле, беҙҙең илдә ниндәй милләт халҡы йәшәй?

**Балалар:** Беҙҙә башҡорт, урыҫ, сыуаш, украин, татар халыҡтары йәшәй!

**Тәрбиәсе:** Еребеҙҙә тыныслыҡ булһын өсөн бөтә халыҡ та берҙәм, дуҫ, татыу йәшәргә тейеш!

**Тәрбиәсе:** Беҙ, балалар, һеҙҙең менән ҙур Рәсәй илендә йәшәйбеҙ, беҙҙең Башҡортостан Республикаһы – Рәсәйҙең бер мөйөшө булып тора.

*Бер бала М. Кәримдең «Ҡайын япрағы тураһында» шиғырын уҡый.*

**Рәжәпова Р.А.**
Первомайский ауылы балалар баҡсаһы МЙББУ тәрбиәсеһе

## «ҠАҘ ӨМӘҺЕ» БАЙРАМЫ СЦЕНАРИЙЫ

(Өлкәндәр төркөмөндә башҡортса телмәр үҫтереү буйынса белем биреү эшмәкәрлеге)

**Маҡсат:** балаларҙы башҡорт халыҡ байрамдарының береһе – «Ҡаҙ өмәһе» йолаһы менән таныштырыу.

**Бурыстар:** байрам аша балаларҙы музыкаль яҡтан оҫталыҡтарын, һүҙ, тел байлыҡтарын байытыу, актив бәйләнешле телмәр үҫтереү, һүҙлек запасын байытыу, балаларҙың ижади әүҙемлегенә булышлыҡ итеү, уларҙың тыуған илгә, башҡорт теленә, бейеүгә, гармун моңона, йырға борондан килгән башҡорт йолаларына һөйөү, бер-береһенә ҡыуаныу, ярҙам итеү тойғоһон, берҙәмлек, татыулыҡ, эшһөйәрлек, ихласлыҡ сифаттарын формалаштырыу, башҡорт халҡының мәҙәни мираҫын һаҡлау. Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың йола, ғөрөф-ғәҙәттәре аша сәләмәт тормош тәрбиәһе биреү, боронғо йолаларға ҡыҙыҡһыныу, ихтирам, һөйөү тәрбиәләү.

**Сара барышы**

**Алып барыусы:** Балалар, әйҙәгеҙ әле бергәләп йыр йырлап алайыҡ. Күңелдәр ҙә күтәрелеп китер, ҡулдар ҙа етеҙерәк йөрөр.

**«Күбәләгем» йыры**

**Алып барыусы:** Йырға бирелеп, тамашасылар тураһында онотҡанмын да баһа.

Һаумыһығыҙ, хәйерле көн, ҡәҙерле тамашасылар, балалар, ҡунаҡтар.

Бөгөн беҙҙә «Ҡаҙ өмәһе» байрамы. «Ҡаҙ өмәһе» – башҡорт һәм татар халыҡтарының иң изге йолаларының береһе. Тәүге ҡар, матур тормош, яҡты көн байрамы ул. Халҡыбыҙ яҙғы эштәрҙе бөтөргәс бер байрам үткәрер булған уны «Һабантуй» тип атағандар.

Ә бынынһы көҙгө эштәрҙе бөтөргәс үткәрелә торған байрам – ҡаҙ туйы, ҡаҙ өмәһе, тип атала.

«Ҡаҙ өмәһе» ауылдарҙа үткәрелгән. Ауыл халҡы: оло инәйҙәр, апайҙар, йәш килендәр, еңгәләр, күрше-күлән, тыуған-тыумаса бер-береһенә ярҙамға – ҡаҙ өмәһенә йөрөгәндәр, улар ҡаҙ йолҡҡандар. Һуңынан бергәләп ҡаҙҙарҙы йылғаға төшөрөп йыуғандар.

Яр буйы уйын, көлкө, йыр-бейеү менән тулған. Төрлө йырҙар йырланған, бейеүҙәр башҡарылған. Ә һуңынан өмәлә ҡатнашҡандарҙы хужа йортона ҡунаҡҡа саҡырған.

Ҡунаҡ өҫтәленең түрендә ҡаҙ бәлеше, ҡаҙ майы менән майланған ҡоймаҡ торған.

Ҡәҙерле тамашасылар, бөгөн беҙ һеҙгә ошо байрамға арналған әҙәби-музыкаль тамаша күрһәтәсәкбеҙ. Рәхим итегеҙ.

**Алып барыусы:** Ҡунаҡтар ҙа киләләр инде. Ҡаршы алайым әле! Әйҙүк, түрҙән уҙығыҙ, рәхим итегеҙ. *(Ҡунаҡтар, бабай, малайҙар башҡорт милли халыҡ кейемендә килеп инәләр)*

**1-се малай:** Әссәләмәғәләйкүм, хужалар, инәйҙәр, апайҙар, ҡыҙҙар!

**Алып барыусы:** Һаумыһығыҙ, ҡунаҡтар, һау ғына килеп еттегеҙме? *(Күрешеп сыға)*

**2-се малай:** Һеҙҙе «Ҡаҙ өмәһе» байрамы менән ҡотлайбыҙ! Йортоғоҙға бәрәкәт, үҙегеҙгә хәрәкәт теләйбеҙ!

**3-сө малай:** Эштәрегеҙ уң булһын,

Ҡаҙҙарығыҙ күп булһын!

**Алып барыусы:** Рәхмәт, балалар, изге теләгегеҙгә, яҡты йөҙөгөҙгә. Амин. Ҡаҙҙарҙы ла йолҡоп, таҙартып ҡуйҙыҡ, йыуырға ғына ҡалды.

**4-се малай:** Йолҡолған ҡаҙ йыуылырға тейеш! Әйҙәгеҙ киттек йылға буйына.

*Йорттан көйәнтәләренә ҡаҙҙар аҫҡан ҡыҙҙар сыға. Йырлайҙар:*

Ҡаҙ ҡанаты, ҡаҙ өмәһе,

Йылдарына бер генә.

Ғүмер буйы онотолмай,
Тыуып үҫкән ил генә.
Ҡаҙ ҡанаты, ҡаҙ өмәһе –
Борондан ҡалған йола.
Һеҙҙә була, беҙҙә була,
Күңел шатлыҡтан тула.
Ҡаҙ ҡанаты ҡаурый-ҡаурый
Ҡоймаҡ майларға ярай.
Уйнамағас та, көлмәгәс,
Был донъя ниңә ярай.

*Балалар залдан сыға, бабай һәм ҡатын-ҡыҙҙар өйҙә ҡала, йыйыштыралар.*

**Алып барыусы:** Инде донъялар тыныс тороп, имен-аман ғүмер итергә яҙһын.

- Бала-сағаның көнөн күреү бәхетенә ирешәйек.

- Бына, ҡайтып та еттеләр ҡаҙ йыуыусылар.

- Рәхмәт, балаҡайҙарым, ниндәй матур, таҙа йыуғандар, юҡҡа ғына «Ағас емеше менән, әҙәм эше менән матур», тип белеп әйтмәгәндәр.

**Алып барыусы:** «Эш бөткәс, уйнарға ярай», тигәндәр боронғолар. Уйнап-көлөп, йырлап-бейеп алайыҡ. Әстәғәфирулла, бабайыбыҙ йоҡлап киткән түгелме һуң? Оло кешегә ни, күп кәрәкме? Йонсоғандыр, арығандыр. Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар, бабайға йыр йырлап алайыҡ, бәлки уяныр.

**Бабай уяна:** Ай аллам, йоҡлап киткәнмен түгелме? Ҡартлыҡ – шатлыҡ түгел шул, бар ине минең дә йәш саҡтар!

**Алып барыусы:** Бабай, йәш саҡтарҙы иҫкә төшөрөп, бейеп алайыҡ әле. (*Бейейҙәр*)

**«Батмус» бейеүе**

**«Мин үҙемде яратам» йыры**

**Алып барыусы:** Балалар, «Аҡ тирәк, күк тирәк» уйынын уйнап алайыҡ.

Аҡ тирәк, күк тирәк, беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

Күмәкләшеп: «Тимур кәрәк», – тиҙәр.

«Тимур шиғыр һөйләһен, Әлфиә йыр йырлаһын».

**Алып барыусы:** Һеҙҙән, беҙҙән, тип тормайыҡ, бергәләп бейейек.

«Батырҙар» бейеүе.

*Бейеү аҙағында «Шүрәле» килеп инә, бармағы бүрәнәгә ҡыҫылған.*

**Алып барыусы** (ҡурҡҡан булып)**:** Абау, кем һуң ул балалар? Ҡот оҫҡос, енме, шайтанмы?

**Балалар:** Шүрәле! Әкиәттән килгән.

**Шүрәле:** Шүрәле шул, мин әкиәттән түгел, ана- а- ау урмандан килдем. «Былтыр» батырҙы эҙләйем мин, ошо яҡҡа китте, тигән инеләр. Ҡайҙа ул? Табып бирегеҙ миңә! Күрәһегеҙме, «Былтыр» ҡыҫты бармағымды.

**Алып барыусы:** балалар, Шүрәле ҡыҫылған бармаҡ менән әле лә йөрөй икән, былтыр ғына түгел, йөҙ былтыр үткән, ә быйыл ҡысҡырып тора.

**Бабай:** Шулай шул. Былтыр ҡыҫҡанға, быйыл ҡысҡырмайҙар! Мин ул – «Былтыр» батыр! Тағы ла бер зыянлыҡ ҡылырға уйлап килгәнһеңдер әле, байрамды боҙоп йөрөйһөң.

**Шүрәле:** Юҡ, юҡ, бармағымды ысҡындыр ҙа ҡайтып китәм. Үтенеп һорайым, зинһар өсөн, ысҡындыра күр.

**Бабай:** Ни эшләйбеҙ, балалар, ысҡындырабыҙмы? Ышанабыҙмы?

**Балалар:** Эйе.

**Бабай:** Кил бында, Шүрәле, бына, бармағыңды ысҡындырҙым. Бар ҡайтып кит инде, ә беҙ байрамды дауам итәйек!

**Шүрәле:** Балалар, ҡалдырығыҙ мине байрамығыҙҙа. Минең дә ҡаҙ ашағым килә, ҡоймаҡлап, бал менән сәй эскем килә. Мин тәүге тапҡыр «Ҡаҙ өмәһе» байрамын күрҙем. Бик күңелле байрам икән! Уйындар өйрәтермен!

**Бабай:** Ҡалдырабыҙмы, рөхсәт итәһегеҙме Шүрәлегә, балалар?

**Балалар:** ҡалдырайыҡ!

**Бабай:** Ярай улай булғас, күрһәт уйындарыңды!

**Шүрәле:** Беренсе уйын – «Милли көрәш» уйыны. Һеҙ көрәшә беләһегеҙме? Ҡайҙа, ҡарайыҡ: кем оҫта, кем көслө, кем сая, кем батыр, сығығыҙ бында! Хәҙер көс һынашабыҙ!

**Балалар:** Мин көслө, мин батыр.

**Бабай:** Башта минең менән көрәш, унан һуң балаларҙы саҡырырһың. (*Көрәшәләр, бабай еңә*). Ә хәҙер, Ильяс улым, һин көрәш, бирешмә, ныҡ бул!

**Шүрәле:** Бик көслө икәнһегеҙ, икегеҙ ҙә еңдегеҙ! Икенсе уйын – «Арҡан тартыш» уйыны. Мин көслөмө, һеҙ көсөлөмө – шунда күрербеҙ! Баҫығыҙ теге яҡка, ә мин был яҡка баҫам. Бер осонан һеҙ тартаһығыҙ, икенсе осонан мин тартам. Аңланығыҙмы? (*Тартышалар, берҙәмлек еңә*)

**Шүрәле:** Балалар, һеҙ шул тиклем дуҫ-татыу, берҙәм икәнһегеҙ! Ә көс бит берҙәмлектә, дуҫлыҡта беленә. Рәхмәт һеҙгә барығыҙға ла!

**Алып барыусы:** Һиңә лә рәхмәт, Шүрәле. Ашыҡма китергә, ҡоймаҡтан ауыҙ ит, байрам табынына рәхим ит. Ҡоймаҡтар ҙа өлгөргән, ҡаҙ майында майланған. Рәхим итегеҙ өҫтәл артына!

**Алып барыусы:** Һай, афарин, ниндәй күңелле! Ә хәҙер балаларҙы тыңлайыҡ.

**«Ҡунаҡтар килде беҙгә» йыры.**

**Алып барыусы:** Бейеүселәр, баҫығыҙ,
Әйләнмәһен башығыҙ,
Уйнап-көлөп, йырлап-бейеп
Күмәк күңел асығыҙ.

**Хәкимова Р.Р.**
Первомайский ауылы балалар баҡсаһы МЙББУ тәрбиәсеһе

## «ЕТЕМ ТӨЛКӨ» БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ӘКИӘТЕ СЦЕНАРИЙЫ

**Маҡсат:** балаларҙы «Етем төлкө» башҡорт халыҡ әкиәтенең йөкмәткеһе менән таныштырыу.

**Бурыстар:** телмәр үҫтереү, халыҡ мәҙәниәтенә ихтирам һәм һөйөү уятыу, балаларҙа тәрбиәлелек, эшһөйәрлек, дуҫлыҡ, татыулыҡ, ғәҙеллек сифаттарын тәрбиәләү.

**Автор:** Бер заман, яҙ көнө айыу, бүре, эт, ҡуян бергә осрашҡандар. Ҡыш көнө һалҡында аҙыҡ табыуы ҡыйын булды, тип зарланышҡандар, ти, былар. Бөтәһе лә шуға риза булып, урман эсендәге бер аҡланға бәләкәй генә өй һалғандар ҙа бергә тора башлағандар.

**Айыу:** Бергә йәшәүе еңелерәк инде, бәләкәй генә булһа ла, йорт һалып индек.

**Эт:** «Күмәкләгән яу ҡайтарған», – тип юҡҡа әйтмәгәндәр.

**Айыу:** Ҡышҡа әҙерләнергә ваҡыт, дуҫҡайҙарым, беҙгә һыйыр һатып алырға кәрәк. Һөтөн һауып, ҡаймағын бешһәк, ҡышҡылыҡҡа берәр батман майыбыҙ булыр.

**Бүре:** Эйе, мин килешәм һинең менән!

**Эт:** Мин дә хуплайым!

**Ҡуян:** Эйе шул, әйҙәгеҙ бөгөн үк баҙарға барып, үҙебеҙ тотоп ашаған йәнлектәрҙең тиреләрен һатайыҡ та, шунан килгән аҡсаға һыйыр һатып алайыҡ!

**Бергә:** Киттек баҙарға!

**Эт:** Мин көн һайын һыйырҙы аҡланға сығып көтөрмөн!

**Бүре:** Ә мин кис менән һөтөн һауып алырмын!

**Ҡуян:** Ә мин һыйырға яҡшыраҡ үләнле ерҙе күрһәтеп йөрөрмөн!

**Айыу:** Ярай, мин үҙем бөтә хужалыҡ эштәрен башҡарырмын!

**Айыу:** Бына инде, дуҫҡайҙарым, йәй үтеп, көҙ ҙә етте.

**Эт:** Һыйыр һатып алып дөрөҫ эшләнек, бер батман һары майлы булдыҡ!

**Айыу:** Был майҙы өй башына, ҡыйыҡ аҫтына ҡуйырға кәрәк, хәҙергә майға берәү ҙә теймәһен. Ҡыш еткәс, аҙлап-аҙлап ҡына алырбыҙ ҙа майға картуф ҡурырбыҙ!

**Бүре:** Әйҙәгеҙ, дүртәүләп һары май тултырылған батманды өй башына күтәреп мендереп, ҡыйыҡ аҫтына йәшереп ҡуяйыҡ!

*Бер көндө кис менән былар сәй эсеп ултыралар, кемдер берәү тәҙрә сиртеән.*

**Айыу:** Кем йөрөй унда, бар әле, Ҡуян, тороп ишекте ас!

*Өйгә ҡулына ҡомған тотҡан төлкө килеп ингән дә эйелеп-бөгөлөп кенә яуап биргән.*

**Төлкө:** Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле дуҫтарым! Хәйерле кис!

**Бүре:** Әйҙә, Төлкө, беҙҙең менән сәй эсергә!

*Теге ултырған. Бер-ике туҫтаҡ сәйҙе эсеп алғас, төлкө ашыҡмай, бик әҙәпле ҡыланып ҡына һүҙ башлаған.*

**Төлкө:** Мин яҡты донъяла япа-яңғыҙ ҡалған үкһеҙ етеммен. Мине лә үҙегеҙҙең араға алһағыҙсы!

**Айыу:** Ярар, һине үҙебеҙҙең араға алыу-алмау тураһында бөгөн һөйләшербеҙ, иртәгә яуабын алырға килерһең!

**Айыу:** Был төлкө әҙәпле генә!

**Бүре:** Эйе, баҫалҡы ғына күренә!

**Эт:** Үҙебеҙҙең янға алайыҡ әйҙә!

**Ҡуян:** Эйе шул, йәл бит, алайык!

**Автор:** Шулай итеп, төлкө улар менән бергә йәшәй башлаған. Ул үҙен бик әҙәпле тотҡан, бөтәһенең дә һүҙен тыңлап, ни ҡушһалар, шуны эшләр булған. Айыуға, бүрегә, этҡә генә түгел, хатта ҡуянға ла ярарға тырышҡан.

Күп тә үтмәй, төлкө ҡыйыҡ аҫтында бер батман май йәшерелгәнен белеп ҡалған. Төлкө, май тиһәң, үлеп бара бит инде. Ул майҙы үҙе генә ашар өсөн хәйлә эҙләй башлаған.

**Төлкө**: Ҡыйыҡ аҫтында бер батман май йәшергәндәр былар, эх нисек итеп был майҙы һиҙҙермәйенсә генә ашарға? Яратам бит мин аҡ майҙы. Үҙем генә ашайым аҡ майҙы, нисек кенә, ниндәй генә хәйлә табарға, ә? Тәк, тәк тәк...

*Баш вата торғас, ул хәйләһен дә тапҡан. Шуның өсөн дә хәйләкәр төлкө, тиҙәр уны!*

**Төлкө:** Айыу ағай, ҡапҡа ныҡ бикләнгәнме икән, тикшереп киләйем булмаһа!

*Шул ерҙә ул урамға сығып тәҙрә сирткән дә, ят тауыш менән.*

**Төлкө:** Етем төлкө өйҙәме?

**Эт:** Өйҙә, өйҙә, хәҙер тыштан инер.

**Төлкө:** Ингәс тә әйтегеҙ уға, хәҙер үк беҙгә яңы тыуған бурһыҡ балаһына исем ҡушырға барһын!

**Эт:** Ярар, әйтербеҙ.

*Төлкө белмәмешкә һалышып өйгә ингән.*

**Айыу:** Төлкөкәй, яңы ғына берәү килеп һине бурһыҡ балаһына исем ҡушырға саҡырҙы!

**Төлкө:** Улай булғас, барырға кәрәк!

*Төлкө йылдам ғына йыйынған да өйҙән сыҡҡан. Өйҙө бер әйләнгәндән һуң, һаҡлыҡ менән генә өй башына һикереп менгән дә батман тулы майҙы ашай башлаған. Туйғансы ашаған ул. Төлкө шунда ятып бер аҙ ял иткән дә өйгә кире ингән.*

**Ҡуян:** Йә, нимә менән һыйланылар үҙеңде?

**Төлкө:** Ҡурылған ҡаҙ, тултырылған тауыҡ, һары май менән!

**Эт:** Ниндәй исем ҡуштың?

**Төлкө:** Башбала тип ҡуштым!

*Икенсе көн еткән.*

**Төлкө:** Миңә тағы ла исем ҡушырға барырға кәрәк!

*Үҙе тышҡа сығып, өй башына менгән дә майҙы батмандың яртыһына төшкәнсә ашаған.*

**Ҡуян:** Яңы тыуған балаға ниндәй исем ҡуштың?

**Төлкө:** Уртансы тип ҡуштым!

*Өсөнсө көндө лә төлкө, хәйләһен табып, өй башына менгән. Был юлы инде майҙы бөтөргәнсе ашаған. Батманды таҙартҡансы ялаған да өйгә ингән.*

**Ҡуян:** Йә, ниндәй исем ҡуштың?

**Төлкө:** Кинйә тип!

*Ҡыш килеп еткән.*

**Айыу:** Йә, дуҫҡайҙарым! Бер аҙ май алып инеп, картуф ҡурырға кәрәк!

*Иптәштәре быға шатланған.*

**Бүре:** Ҡана, ҡурайыҡ.

**Айыу:** Бар, төлкө, һин бер аҙ май алып ин!

*Бөтәһе лә тышҡа сыҡҡандар. Төлкө стена буйлап өй башына менә башлаған да кире ҡолап төшкән. Менә алмауына һылтау тапҡан.*

**Төлкө:** Бик бейек икән шул, мин унда менә алмайым!

*Эт төлкөгә ярҙам итергә булған. Елкәһенә баҫтырған да өй башына мендергән. Шул ерҙә түбәндә ҡалыусылар төлкөнөң сыйылдап ҡысҡырыуын ишеткәндәр.*

**Төлкө:** Бында бер төрлө лә май юҡ! Буш батман ғына бар!

*Уға берәүһе лә ышанмаған. Шул ваҡыт төлкө буш батманды түбәнгә тәгәрәтеп төшөргән. Ҡараһалар, батман ысынлап та буп-буш булып сыҡҡан.*

**Айыу:** Был майҙы ниндәй оятһыҙы ашаған икән? Хәҙер үк табырға кәрәк ҡараҡты!

**Эт:** Ҡараҡты нисек табырға?

**Айыу:** Ҡана, ҙур итеп ут яғайыҡ та үҙебеҙ шуны тирәләп ултырайыҡ. Майҙы кем ашаған булһа, ут ҡыҙыуынан уның эсендәге майы ирееп тышҡа сығыр!

*Шулай итеп, ут яғып ебәргәндәр былар. Ут янында ултыра торғас, улар йылыныуҙан ойоп йоҡоға киткәндәр. Ҡыштың тәүге һалҡын көндәре булғанлыҡтан, айыу бөтәһенән дә ҡатыраҡ йоҡлаған. Төлкө генә керпек тә ҡаҡмаған. Шул ерҙә ул үҙенең бөтә тәне буйлап май һарҡып сыға башлауын күргән, һиҙеп ҡалһалар, миңә яҡшылыҡ булмаҫ, тип ҡурҡҡан. Ҡорһағына*

*сыҡҡан майҙы комғанына йыйып барған, шунан уны айыу өҫтөнә илтеп ҡуйған. Йоҡоларынан уянып ҡараһалар, барыһы ла ҡоп-ҡоро, ә айыуҙың бөтә тәне майға мансылған, ти.*

**Төлкө:** Майҙы бына кем ашаған икән!

*Шунан айыуҙы муйынынан аҫып ҡуйырға булғандар.*

**Айыу:** Ашыҡмағыҙ! Бында ниндәй ҙә булһа хәйлә бар! Утты тағы ла ҡыҙыуыраҡ яғырға ла ҡайтанан һынап ҡарарға кәрәк.

*Бөтәһе лә быға риза булған.*

**Төлкө:** Ут яғырға кәрәкмәй, былай ҙа айыу ағайға бик эҫе бит!

*Төлкөнөң һүҙен тыңламайынса, тағы ла ут яҡҡандар ҙа, бөтәһе лә түңәрәтеп ултырған. Айыу, үҙенең ҡышҡы ғәҙәте буйынса, тағы ла хырылдап йоҡоға киткән. Ә бүре, эт, ҡуян юрамал йоҡлағанға һалышҡандар. Төлкөнөң тағы ла майы һарҡып сыға башлаған. Төлкө, башҡа йәнлектәрҙең йоҡлағанын күргәс тә, тағы ла үҙенән сыҡҡан майҙы комғанына тултырып алып, айыу өҫтөнә ҡуймаһынмы! Бүре, ҡуян, эт быны күреп ҡалғандар ҙа төлкөгә ташланғандар.*

**Бүре:** Бына ҡайҙа икән ул ҡараҡ! Етмәһә, йыуаш ҡына бер етем булып ҡыланды!..

*Был шау-шыуға айыу ҙа уянған. Уға булған хәлде түкмәй-сәсмәй һөйләп биргәндәр.*

**Төлкө:** Мин майҙың тамсыһын да ашағаным юҡ!

*Шул ерҙә бөтәһе лә төлкөнөң яғаһынан алып бәйләгәндәр ҙә, утты тағы ла ҡыҙыуыраҡ яғып, уны ут өҫтөндә тотҡандар. Ә май ут өҫтөнә аға ғына биргән. Шунан һуң улар төлкөнө үлтерә яҙғансы туҡмағандар.*

**Айыу:** Хәҙер үк үксәңде ялтырат бынан!

**Бүре:** Эҙең дә булмаһын!

**Эт:** Беҙҙең арала һиңә урын юҡ!

**Ҡуян:** Хәйләкәр төлкө.

*Төлкө комғанын алған да башы һуҡҡан яҡҡа олаҡҡан, ти.*

**Әйүпова З.С.**
Стәрлебаш ауылының 3-сө балалар баҡсаһы МБМББУ

## “СТӘРЛЕБАШ БИҘӘКТӘРЕ”
**(Кис ултырыу/ Посиделки)**
(Өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәре өсөн
фольклор байрамы сценарийы)

**Маҡсат**: Башҡорт халҡының йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән, халыҡ оҫталарының һөнәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Башҡорт халыҡ уйындарына, йырҙарына, бейеүҙәренә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Телмәр үҫтереү. Балаларҙа халыҡ ижадына һөйөү тәрбиәләү. Йәмғиәттә милли художество һөнәренә – башҡорт шәленә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу.

**Һүҙлек эш**: мамыҡ шәл, орсоҡ, кәзә тарағы, ая (аялай).

**Алдан алып барылған эш**: шәлдәр күргәҙмәһен ойоштороу.

**Байрам барышы:**



**Тәрбиәсе.** Һаумыһығыҙ, балалар! Хәйерле көн, тәрбиәселәр! Бөгөн беҙ халҡыбыҙҙың матур байрамын – “Кис ултырыу. Шәл өмәһе” йолаһын ҡарарға йыйылдыҡ.

Башҡортостанда йыл һайын “Башҡорт шәле” тигән байрам, фестиваль-конкурс ойошторола. Өфөлә "Башҡорт шәле" конкурсында иң оҫта шәл бәйләүселәре генә ҡатнаша.

Беҙҙең Стәрлебашта ойошторолған мамыҡ шәл оҫталары төркөмө (клуб) “**Стәрлебаш биҙәктәрә**” тип атала. Унда мамыҡ шәле оҫталары йыйылған. Етәксеһе – Зөлфиә апай Вапаева. Улар төрлө биҙәкле шәлдәр бәйләй беләләр. Матур, ҡатмарлы биҙәктәр уйлап сығаралар. Шунан эштәрен йыйып Өфөгә фестиваль-конкурҡа барып, күргәҙмә ойоштороп, нисек эшләй белгәндәрен күрһәтеп, еңеп, маҡтау граматалары, дипломдар, бүләктәр алып ҡайталар. Улар араһында республикала берҙән-бер ир-егет Илһам Вәлиуллин да бар. Шәл бәйләү еңел эш түгел, халыҡ тормошонда һәм тарихында ҙур әһәмиәткә эйә һөнәр. Стәрлебаш оҫталарының шәлдәре, Мәскәүҙә ВДНХ күргәҙмәләрендә ҡатнаша. «Стәрлебаш биҙәктәре» беҙҙең райондың бренды булып тора.

**Өләсәй.** “Кис ултырыу” – халҡыбыҙҙың матур байрамы, йолаһы ул. Кис ултырыуҙа ҡыҙҙар йыйылышып ҡул эштәре эшләгәндәр: сигеү сиккәндәр, шәл бәйләгәндәр, йөн иләгәндәр, ауыл хәбәрҙәрен һөйләшкәндәр, уйын-көлкө булған. Һуңыраҡ егеттәр ҙә килгән. Кис ултырыу йыр-бейеү менән тамамланған.

**Тәрбиәсе**. Ясминәнең ата-әсәһе ҡунаҡҡа киткән күрше ауылға, әйҙәгеҙ, кис көнө уларҙа йыйылабыҙ. Күмәкләшеп ҡул эштәрен эшләрбеҙ...

*Ишек шаҡыйҙар.*

**Өләсәй.** Ясминә ҡыҙым, кем килгән? Ҡара әле! Белмәгән кешегә ишекте асма.

**Ясминә**. Ҡыҙҙар килгән.

*Тәрбиәсе менән ҡыҙҙар килеп инәләр, мамыҡ эштәрен үҙҙәре менән алғандар.*

**Балалар.** Һаумыһығыҙ, өләсәй!

**Тәрбиәсе.** Һаумыһығыҙ, инәй. Хәлдәрең нисек? Беҙ һеҙгә кис ултырырға килдек. Үҙебеҙ менән ҡул эштәрен алып килдек.

**Рәлиә өләсәй**. Рәхим итегеҙ! Ишек асыҡ! Аллаға шөкөр! Түрҙән уҙығыҙ. Ултырышығыҙ. Беҙ ҙә йәш саҡта эштән һуң кис ултыра инек. Ҡульяулыҡ, таҫтамал сиктек, шәл бәйләнек, ауыл хәбәрҙәре һөйләштек, уйнаныҡ, көлдөк. Аҙаҡ йырланыҡ, бейенек. Э-эй, бар ине матур саҡтар!

*Ҡыҙҙар ултырышалар. Ҡул эштәре эшләйҙәр.*

**“Шәл бәйләнем” көйө яңғырап тора.**

**Өләсәй.** Йәгеҙ әле, ҡул эштәрегеҙҙе күрһәтегеҙ әле. Нәмәгә өйрәндегеҙ икән? Кем оҫтараҡ икән?

*Ҡыҙҙар бәйләп эшләгән ҡул эштәрен күрһәтәләр.*

**Тәрбиәсе.** Ай-һай, ҡалай оҫталар! Белмәгәндәре юҡ. Ҡайһылай затлы әйберҙәр бәйләгәндәр кәзә мамығынан. Ҡара һин уны!

*Ҡыҙҙар бер-береһенә ҡул эштәрен күрһәтешәләр, маҡтайҙар.*

**Тәрбиәсе**. Ә бына мин шәл бәйләнем, бөгөн генә бөттөм. Ҡарағыҙ әле, матурмы? Тотоп та ҡарағыҙ, шундай йомшаҡ килеп сыҡты.

**Ҡыҙҙар, өләсәй.** Матур, бик тә матур! Йомошаҡ ҡына...

**Тәрбиәсе**. Ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ шәлдәребеҙ менән бейеп алайыҡ.

**«Шәл бәйләнем» күмәк бейеү башҡарыла.**

**Өләсәй.** Һай, афариндар! Бик матур бейенегеҙ. Балалар, былай булғас, мин һеҙгә йомаҡ ҡоям әле.

*Йомаҡ ҡойоу.*

Дүрт мөйөшө бар, ҡапҡасы бар, асыла лаябыла.

Нәмә генә юҡ уның эсендә. (һандыҡ)



**Өләсәй.** Эйе, дөрөҫ. Һандыҡ. Беҙҙең өйҙәге һандыҡтың төбөндә нимәләр бар икән. Күргегеҙ киләме? Өҫтөндә сигелгән мендәрҙәр. Өләсәйем һандығы ул. Эсе серҙәргә тулған.

**Тәрбиәсе**. Был – һандыҡ. Элек өләсәйҙәр йәш саҡтарында ҡул эштәрен һаҡлағандар.

*Кәзә тарағы, ая, орсоҡ, мамыҡ, кәләбә менән таныштыра. Эшләп күрһәтә, аңлата.*

**Өләсәй.** Уңған, алтын ҡуллы ҡыҙҙар икәнегеҙҙе күрһәттегеҙ. Афариндар! Бына хәҙер йыр тыңлап алайыҡ. Йырлай беләһегеҙме?

**Тәрбиәсе.** Белә-белә... бына Азалия бик матур йыр өйрәнгән... Азалия, йырлап ишеттер әле.

***Йыр**. Тирәк-тирәк (Азалия башҡара)*.

**Тәрбиәсе.** Бейеп, йырлап та алдыҡ, әйҙәге, уйын уйнап та алайыҡ.

*Балалар түңәрәккә ултыралар.*

**Тәрбиәсе.** Бармаҡ һанаш уйынын уйнайыҡ! Был – олатай бармаҡ...Бутыр-бутыр бутҡа бешә...

**Тәрбиәсе.** Афариндар! Телгә лә маһир икәнһегеҙ.

**Тәрбиәсе.** Әйҙәгеҙ**,** “Йәшерәм яулыҡ” уйынын уйнайыҡ. Уның өсөн көтөүсе һайларға кәрәк.

**Балалар.** Мин һынашмаҡ әйтәм. «Бер бабай юлға сыҡҡан, тәгәрмәсе ватылған, тәгәрмәсен йүнәтергә нисә сөй кәрәк булған?»

*Балалар "Йәшерәм яулыҡ" уйыны уйнайҙар.*

Йәшерәм, йәшерәм яулығымды.
Йәшел ҡайын артына.
Һиҙҙермәйсә һалып китәм,
бер иптәшем артына.

**Йыр** "Мин илемде яратам", Радмила башҡара.




**Өләсәй**. Булды, булды балалар, һуң, булып китте. Ҡайтышырға ваҡыт етте.

**Тәрбиәсе.** Эйе шул, ҡараңғы төштө, ҡайтырға кәрәк. Һау булығыҙ.

**Өләсәй**. Һау булығыҙ. Имен-һау йөрөгөҙ!

**Балалар**. Һау булығыҙ, өләсәй. Рәхмәт һеҙгә.

*Балалар сығып китә. Башҡортса көй уйнай.*

**Әйүпова З.С.**
Стәрлебаш ауылының 3-сө балалар баҡсаһы МБМББУ

**«ТУҒАН ТЕЛ» / «РОДНОЙ ЯЗЫК»**
(Өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәре өсөн
иртәлек сценарийы)




**Маҡсат.** Балаларға башҡорт теленең нәфислеген, яғымлылығын, бай булыуын күрһәтеү; башҡорт теленә ҡарата һөйөү, ихтирам, ғорурлыҡ тойғолары уятыу; балаларҙың телмәрен халҡыбыҙҙың йырҙары, бейеүҙәре аша байытыу, ауыҙ-тел ижады менән таныштырыу; туған башҡорт телдәренә һөйөү, ғорурлыҡ хисе уятыу; бер-береһенә иғтибарлылыҡ, яғымлылыҡ тәрбиәләү.

**Әҙерлек эше.** Башҡорт теле тураһында шиғырҙар ятлау, йырҙар, бейеүҙәр өйрәнеү.

*Музыка яңғырай, ҡурай уйнай.*

***Алып барыусы***

Мин халҡымдың сәскә күңеленән
Бал ҡортондай ынйы йыямын,
Йыямын да йәнлә ынйыларҙан
Хуш еҫле бер керәҙ ҡоямын.
Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен,

Бер телдән дә телем кәм түгел,
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер уны тик кәм күңел.
Халҡым теле миңә хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең телем юҡ.
Әсәм теле миңә сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ.
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ.

Һаумыһығыҙ, балалар, тәрбиәселәр! Хәйерле көн! Бөгөн беҙ туған телебеҙгә бағышланған иртәлеккә йыйылдыҡ. Бар илдә лә 21 февраль туған тел көнө буларак билдәләнә.

Һәр кешенең иле бер генә булған кеүек, туған теле лә бер генә. Телгә баланы уның иң ғәзиз, иң яҡын кешеһе – әсәһе өйрәтә, шул телдә әсәй бишек йырҙары йырлай, иркәләй. Шуға күрә лә уны әсә теле тип әйтәләр.

Ә һеҙ нисек аңлайһығыҙ, нимә ул туған тел?

Һеҙ ниндәй телдә һөйләшә беләһегеҙ? Ниндәй телдәр була?

Кеше башҡа халыҡтың телен  ни өсөн өйрәнә?

**Балалар туған телдә  шиғырҙар һөйләйҙәр.**

**1 бала. Саида**

Башҡортса ла яҡшы бел,
Русса ла яҡшы бел.
Икеһе лә беҙҙең өсөн
Иң кәрәкле, затлы тел.

**2 бала. Риналь**

На «Пять» башкирский надо знать,
И русский надо знать на «пять».
Вокруг два языка слышны,
Они нам дороги, нужны.

***Алып барыусы***. Әйҙәгеҙ әле байрамды **йыр** менән асайыҡ.

“**Яратам мин илемде”.** Ҡыҙҙар йырлай, солист **Фахриева Арина.**

***Алып барыусы.*** Кем дөрөҫ һәм һәйбәт һөйләшергә теләй? Һөйләшкәндә һүҙҙәрҙе асыҡ, аңлайышлы итеп әйтергә кәрәк.

***Скороговорки (тиҙәйткестәр)***

***Арина. Ҡара ҡарға …***

***Ралина. Шла Саша по шоссе …***

***Рамина. Мейес башында бесәй …***

***Даниель. Өйрәк әйтә баҡ-баҡ ...***

***Радмила. Әйтсе миңә …***

***Рушан. Һаумы, ҡояш...***

***Саида. Ҡуян ...***

***Денис. Бағана ...***

***Риналь. Про покупки...***

***Самира. Ҡаҙҙар...***

***Алып барыусы.*** Башҡорт халҡы – тәбиғәт балаһы, ул йыр-моңға бай, бейеүҙәре генә ни тора. Хәҙер башҡорт милли бейеүен ҡарайыҡ.



***Алып барыусы.***
Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, илем бар.
Тыуған ояһынан айырылған
Ҡанатына мәңге ял тапмай.
Туған телен яратмаған кеше,
Башҡаларҙың телен яратмай.

**Шиғырҙар**

**Арина.** *Ғ. Ғүмәр "Башкортостан"*
Башкортостан – һин беҙҙең
Тыуған, үҫкән илебеҙ.
Беҙгә икмәк, һөт биргән,
Һыуын эскән еребеҙ.
**Ралина.** *Р. Ниғмәти «Ватан»*
Беҙҙең Ватан шундай матур
Ҡояштай балҡып тора.
Тауҙары зәңгәр болоттай
Күктәрҙә ҡалҡып тора.
Һыуҙары тере көмөштәй
Йылтырап ағып тора.
Баҡсаларында емештәр
Ерҙәргә тамып тора.
**Самира.** *Ҡ. Даян "Тыуған ил"*
Иң ҡәҙерле, иң һөйөклө
Тыуып-үҫкән ил бит ул.
Йөрәктәрҙә тамыр йәйгән
Шиңмәй торған гөл бит ул.
Тыуған илем – дуҫлыҡ иле,
Беҙҙә халыҡ дуҫ йәшәй.
Бөтә милләт халыҡтарын
Тыуған итте ҙур Рәсәй.

***Алып барыусы.***

Йырлайбыҙ ҙа, бейейбеҙ ҙә,

Бөгөн беҙгә барыһы бер.

Беҙ бейемәй кем бейеһен,

Беҙҙең тормош ал да гөл.

*Башҡорт көйөнә* ***поднос менән бейеү,*** *ҡыҙҙар башҡара.*




***Алып барыусы.*** Беҙҙең балалар баҡсаһына төрлө милләт балалары йөрөй. Һәр халыҡ үҙ туған телендә һөйләшә: башҡорттар – башҡортса, татарҙар – татарса, рустар – русса, сыуаштар – сыуашса. Һәр халыҡтың үҙ ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, була.

Беҙ Башҡортостанда йәшәйбеҙ. Бөгөн башҡорттарҙың кейем-һалым, көнкүреш йолалары менән таныштыҡ. Башҡорттар – республиканың төп халҡы.

Беҙҙең республиканың баш ҡалаһы нисек атала? Башҡорт халҡы бик ҡыҙыҡтырырлыҡ, үҙ мәҙәниәте һәм традицияларға бай. Элек-электән улар дан тотҡан, оҫта һунарсы булған. Ат һөтөнән яһалған эсемлектәр һаулыҡ өсөн файҙалы. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары балаҫтар һуҡҡандар, таҫтамалдар сиккәндәр.

*Хәҙер балалар туған телдәрендә* ***шиғырҙар*** *һөйләйҙәр.*

**Самира (узбекский язык)**

**Радмила (татарский язык)** “Иртәнге ҡояш иркәли”

**Алена (чувашский язык)**
Туш уйохе веденче
Хевел пахре ашатса
Чуваш селпи яленче
Юр ирелче васкаса

***Алып барыусы.*** Әйҙәгеҙ әле бергә уйнап алайыҡ.
**Башҡорт халыҡ уйыны «Тирмә»**.

***Алып барыусы.*** Ә хәҙер, балалар, бергәләшеп төрлө телдәрҙә иҫәнләшеп ҡарайыҡ. 10-ға тиклем төрлө телдәрҙә һанап күрһәтәйек: Һаумыһығыҙ, здравствуйте, исәнмесез, гудафтенун.
1.2.3……

**Йыр "Ҡояшлы ил"**
Ҡояшлы ил – беҙҙең ил,
Күге уның гел аяҙ, гел аяҙ.
Ҡыш килтерһә Ҡыш бабай,
Сәсәк алып килә яҙ.
Сәсәк алып килә яҙ.
Һауаһы ла, ере лә,
Салауат күпере лә, ля-ля-ля
Ямғыры ла, ҡары ла,
Беҙгә яҡын бары ла.
Беҙгә яҡын бары ла.

***Алып барыусы.*** Ҡәҙерле балалар, хөрмәтле ҡунактар, бына һеҙҙең менән һаубуллашырға ла ваҡыт етте. Һау булығыҙ! Бөгөнгө байрам һеҙҙең күңелдәрегеҙгә дәрт өҫтәһен. Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!

**Яушева Р.К.**
Баҡый ауылы балалар баҡсаһының өлкән тәрбиәсеһе

**“ӨЛӘСӘЙҘЕҢ БАУЫРҺАҠТАРЫ”**
(Өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

**Маҡсат:**

1. Балаларҙың башҡорт халҡының милли ризыҡтары тураһында белемдәрен киңәйтеү, уларҙы бауырһаҡ яһау менән



таныштырыу; ҡамыр йәйергә һәм бауырһаҡ киҫергә өйрәтеү; ҡамыр йәйеү һәм киҫеү өсөн ҡулланыла торған эш ҡоралдары менән таныштырыу һәм улар менән эшләргә өйрәтеү.

2. Балаларҙың иғтибарлылығын, бәйләнешле телмәрен үҫтереү;

3. Башҡорт ғөрөф-ғәҙәттәренә хөрмәт, ихтирам һәм хеҙмәткә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Эш ҡоралдары**: бауырһаҡ йәйергә таҡта, уҡлау, пластилин бысаҡтары (стеки), алъяпҡыстар, ҡамыр, тоҙ, он.

**Күргәҙмә әсбаптары:** башҡорт халык аштары төшөрөлгән һүрәттәр.

**Һүҙлек эше**: уҡлау, ҡамыр, бауырһаҡ, сәксәк.

**Белем биреү эшмәкәрлеге барышы:**

Балалар ярым түңәрәк яһап ултырғыстарға ултыралар.

Бүлмә башҡорт тормош-көнкүрешенә бағышлап йыһазландырылған. Тәрбиәсе балалар менән милли кейемдә бүлмәгә керәләр.

**Тәрбиәсе:** Һаумыһығыҙ, балалар! Балалар, ҡарағыҙ әле, беҙҙең почта йәшнигенә хат килгән. Уҡыйбыҙмы хатты?

**Балалар**: Эйе!

**Тәрбиәсе:** Урындарығыҙға ултырығыҙ**.** Был хатта Гөлнәзирә өләсәй беҙгә ҡунаҡҡа килеүе һаҡында яҙған. Ә һеҙ ҡунаҡтарҙы ҡаршы алырға яратағыҙмы?

**Балалар**: Эйе!

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙҙең республика нисек атала?

**Балалар**: Башҡортостан Республикаһы.

**Тәрбиәсе:** Беҙҙең башҡорт халҡы элекке ваҡыттан ҡунаҡсыллығы, ихласлығы, киң күңеллелек, йомартлығы, тағы әллә күпме сифаттар менән айырылып торған башҡа милләттәрҙән. Һәр бер милләттең милли ризыҡтары бар. Ә һеҙ беләһегеҙме башҡорт милли ризыҡтарын, балалар? Бөгөн башҡорт милли ризыҡтары тураһында һөйләшеүҙәр алып барасаҡбыҙ.

Борон-борон заманда башҡорт кешеләре һөт һәм ит аҙыҡтары менән генә туҡланғандар. Кемдә һыйыр булған "Һыйлы көнөң һыйырҙа" тигәндәр. Һыйыр һөтөнән май, ҡаймаҡ, ҡатыҡ, ҡыҙыл эремсек эшләгәндәр. Шулай уҡ бейә һөтөнән ҡымыҙ, айран эшләгәндәр (*һөт аҙығы һүрәттәре күрһәтелә*). Иттән – бишбармаҡ, һурпа, һалма, ҙур бәлештәр, ҡыҫтыбый һәм бауырһаҡ бешергәндәр *(ризыҡ һүрәттәре күрһәтелә).* Бауырһаҡһыҙ бер табын уҙғармағандар *(бауырһаҡ һүрәте күрһәтелә).*

**Тәрбиәсе:** Балалар, әйҙәгеҙ әле Гөлнәзирә өләсәйгә бауырһаҡ эшләйек тоҙло ҡамырҙан. Әйҙәгеҙ, һүрәтте ҡарайбыҙ. (*Балаларҙың яуаптары*)

**Тәрбиәсе:** Ә беҙ хәҙер ҡамырҙы алабыҙ усыбыҙға, икенсе усыбыҙ менән ҡыҫып тура йүнәлештә тәгәрәтәбеҙ. Беҙҙең ҡамырыбыҙ оҙонса булды, хәҙер стека менән тигеҙ өлөштәргә киҫәбеҙ, балалар, эш барғанда йыйнаҡ, бөхтә булыуыбыҙҙы онотмайбыҙ, өҫ кейемебеҙҙе бысратмай таҡта өҫтөндә генә эшләйбеҙ. Һай, афариндар! Бик матур килеп сыҡты бауырһаҡтар. Әйҙәгеҙ, бауырһаҡтарыбыҙҙы өйөп ҡуяйыҡ, өләсәй килеүенә әҙер торһон. Арығанһығыҙҙыр, ял итеп алайыҡ.

**Ял минуттары.**

Мин атлайым, һин атлайһың.
Аяҡтар тыпырлайҙар:
Тап та топ, тап та топ.
Мин йырлайым, һин йырлайһың,
Ә ҡулдарға күңелле:
Сәп тә сәп, сәп тә сәп.

Ишек шаҡыйҙар. Гөлнәзирә өләсәй керә.

**Тәрбиәсе, балалар**: Һаумыһығыҙ, Гөлнәзирә инәй. Нисек килеп еттегеҙ? Хәлдәрең нисек?

**Өләсәй**: Сыр-сыу килеп уйнаған тауыштарығыҙҙы ишетеп килеп тә еттем.

**Тәрбиәсе:** Беҙ һеҙҙе күптән көтәбеҙ, Гөлнәзирә инәй, һыйыбыҙ ҙа әҙер. Балалар, өләсәйгә шиғырҙар уҡып ишеттерәйек әле.

1 бала: Һаумыһығыҙ, Гөлнәзирә өләсәй!
Бына һеҙ ҙә килеп еттегеҙ.
Беҙҙең баҡсабыҙҙың тормошон күрергә.
2 бала: “Ҡояшҡай” баҡсаһына
Йыйылды татлы аштар,
Иң ҡәҙерлеһе – икмәк.
Табын йәме – бауырһаҡ,
Ултыралар теҙелеп,
Ҡабарып, өҫтәл тулып.
3 бала: “Табын йәме – бауырһаҡ”, тигән
Һүҙҙәр йөрөй түгелме?
Һәр бер мәжлестең түрендә
Урын ала түгелме?
4 бала: Баллы бауырһаҡҡа күңеле
Күтәрелә ҡыҙҙарҙың.
Хәҙер инде тыпыр-тыпыр
Бейейһе бар уларҙың.
**Өләсәй:** Эй, афариндар, балаҡайҙар.

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ, балалар, хәҙер өләсәйгә йыр йырлап алабыҙ.

“Минең әләсәй”



Өләсәйемдең сәстәре ап-аҡ,
Ерҙәге ҡарҙай күренә ҡайсаҡ,
Һүҙҙәре уның күңелгә яҡын,
Йөҙө мөләйем, ҡулдары алтын.
Ул эшһеҙ тормай, йә иҙән йыуа,
Йә ҡош-ҡорттарын баҡсанан ҡыуа,
Йә күлдәк тегә, йә һырый юрған,
Йә ҙур тәҙрәгә әҙерләй ҡорған.
Өләсәйемдең сәстәре ап-аҡ,
Ерҙәге ҡарҙай күренә ҡайсаҡ.
Ваҡытын бер ҙә ул әрәм итмәй,
Иллә үҙенең эше һис бөтмәй.

**Өләсәй:** Эй, рәхмәт яуғырҙар!

**Тәрбиәсе:** Хәҙер күмәкләп уйнап алайыҡ.

***«Йәшерәм яулыҡ» уйыны уйнала.***

**Өләсәй:** Балалар, эй, онотоп ултырам, йырҙар тыңлап күңелдәрем күтәрелеп китте. Мин бит һеҙгә күстәнәс килтергән инем. Әйҙәгеҙ, ашъяулыҡ янына, тирәләп ултырығыҙ.

*Ашъяулыктың уртаһына бауырһаҡ ултырталар, сәй тараталар. Бөтәһе лә бауырһаҡты маҡтап-маҡтап ашайҙар.*




**Өләсәй:** Балалар, был матур ризыҡ ҡайҙан барлыҡҡа килгән, беләһегеҙме? Борон-борон заманда, йәшәгән бер хан. Кем иң ябай аҙыҡтан бик тәмле ризыҡ бешерә, шул ҡыҙҙы улына кәләш итеп ала, ти. Эй, ҡыҙҙар тырышалар икән, берәүһенең дә тәмле булмаған. Хан асыуы килеп атына ултырған да бик йыраҡ сабып киткән, асыҡҡан. Ҡараһа, бер тирмә күреп ҡалған, барып кергән. Көтөүсе ҡыҙы күкәй һәм ондан майҙа бик туҡлыҡлы ризык бешереп торған. Хан ауыҙ иткәндән һуң, ғәжәпләнгән. Ҡыҙҙан һораған нимәнән бешергәнен. “Күңел йылыһынан”, тип яуап биргән ҡыҙ. Ханға яуап оҡшаған һәм улына кәләш итеп алып биргән.

**Тәрбиәсе:** Гөлнәзирә инәй, риүәйәтте ишеткән булманы, бик матур, бауырһаҡ та бик тәмле булды, ҙур рәхмәт.

**Өләсәй:** Мине ҡунаҡҡа саҡырғанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт, балалар!



**Тәрбиәсе:** Башҡорт йолаһы буйынса ҡунаҡтарҙы күстәнәс менән оҙаталар. Бына һеҙгә күстәнәс. Һау булығыҙ! (*Тәрбиәсе, балалар оҙатып ҡала Гөлнәзирә инәйҙе)*

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙ бөгөн нимә яһарға өйрәндегеҙ? (*камырҙы йәйергә, киҫергә өйрәндек)*

Ниндәй уйындар уйнанығыҙ?

*Башкортса көй уйнай.*

**Яушева Р.К.**
Баҡый ауылы  балалар баҡсаһының өлкән тәрбиәсеһе

## «АЛТЫН УРАҠ» БАЙРАМЫ

(Мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн фольклор байрамы сценарийы)

**Бурыстар:**

1) балаларҙы тәбиғәт миҙгелдәре менән таныштырыу; тәбиғәткә һөйөү, һаҡсыл ҡараш, ғорурлыҡ хисен тәрбиәләү; икмәккә, хеҙмәт кешеләренә ихтирам тойғоһон уятыу;

2) бәйләнешле телмәр үҫтереү;

3) үҙ халҡындың мәҙәниәтенә, халыҡ уйындарына, йырҙарына, байрамдарына ҡыҙыҡһыныу, уларҙы өйрәнергә теләк уятыу.

### Байрам барышы

**Алып барыусы:** Һаумы, һаумы, Сөмбөлә!

Рәхим ит, әйҙә түргә!

Һинең менән байрам итеү

Күңелле булыр беҙгә!

**Сөмбөлә:** Ашлыҡтар уңды быйыл! Бәрәңге, кишер, һуғандар, помидор һәм боростар – йәшелсәм уңды быйыл!

**Алып барыусы:** Сөмбөлә, беҙ һинең килеүгә әҙерләндек!

-Балалар, ҡарағыҙ әле, был нимә? (ураҡ)

-Эйе, был ураҡ!

-Ә был нимә? (башаҡтар)

-Эйе, дөрөҫ, башаҡтар. Элек комбайндар юҡ саҡта ураҡ менән иген урғандар. Уңышҡа шатланып, яланда йырлай-йырлай эш эшләгәндәр. Балалар, йыр ҙа йырлап ишеттерәйек Сөмбөләгә.

**Йыр “Косилка, молотилка**”

Уйнап алайыҡ әле /лә/,

Йырлап алайыҡ әле,

Уйнап, көләп, йырлап, бейеп

Күңел асабыҙ бергә.
Косилка, молотилка
Сортировка, веялка.
Уйнайбыҙ бергә-бергә /лә/,
Бейейбеҙ бергә-бергә.
Уйнап-көлөп, шау-гөр килеп,
Эшләйбеҙ бергә-бергә.
**Сөмбөлә:** Ай-һай! Афарин!
Бик һәләтле икәнһегеҙ,
Талантлы, шаҡ ҡатырлыҡ!
Минең күрәһем килә, нисек һеҙҙең тапҡырлыҡ?
Йомаҡтар беләһегеҙме?

**Алып барыусы:** Әлбиттә! Беҙҙең балалар йомаҡтар ҙа беләләр.

Әйҙәгеҙ, балалар, йомаҡ сисәйек.
Бала: Ашлыҡтар үҫте,
Башаҡтар беште.
Ҡояш бешерә,
Тиргә төшөрә.
Халыҡ ашыға,
Китә баҫыуға
Игенен ура.
Был ҡасан була? (көҙ)
**Бала**: Ҡыҙарып беште, ергә төштө. (алма)
**Бала:** Осо нәҙек, төбө йыуан, ярата уны ҡуян. (кишер)
**Бала**: Үҙем илайым, үҙем тунайым. (һуған)
**Бала:** Яҙ сәсәләр, көҙ уралар. (иген)
**Бала:** Ҡояшҡа оҡшаш үҙе,
Гелән ҡояшҡа ҡарай.
Йөҙөндәге мең емеште
Беҙгә ашарға ярай! (көнбағыш)
**Сөмбөлә:** Бигерәк тә тапҡырҙар икәнһегеҙ!
**Алып барыусы:** Беҙ әйтемдәр, мәҡәлдәр ҙә беләбеҙ!
Балалар: Эшлеклене иген баҫыр, эшлекһеҙҙе йоҡо баҫыр.

Икмәк – табын ҡояшы.

Ил күрке – иген, егет күрке – белем.

Тирләп эшләһәң, тәмләп ашарһың.

**Сөмбөлә**: Ай, афарин, балалар!

**Алып барыусы:** Сөмбөлә, беҙ ҡышҡылыҡҡа бик яҡшы әҙерләндек. Һыйырға, һарыҡҡа, кәзәләргә бесән әҙерләнек, өйҙө йылытырға утын ярҙыҡ!

*Утын, балта, салғы күрһәтелә, балалар әйтәләр.*

Бына күрегеҙ, беҙ нисек эшләнек!

**Йыр "Әйтегеҙ әле, балалар?"**

Әйтегеҙ әле, балалар,
Гөлдәр нисек үҫәләр?
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай үҫәләр!
Әйтегеҙ әле, балалар,
Нисек бесән сабалар?
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай сабалар!
Әйтегеҙ әле, балалар,
Нисек утын яралар?
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай яралар!
Әйтегеҙ әле, балалар,
Һеҙҙә нисек бейейҙәр?
Бына шулай, бына шулай, бына шулай бейейҙәр!

**Алып барыусы:** Беҙҙең балалар бына нисек әҙерләнгәндәр ҡышҡа. Утын ярғандар, бесән сапҡандар, баҡсала йәшелсә-емеш үҫтергәндәр!

**Сөмбөлә:** Уңышым яҡшы быйыл! Бәрәңге, кишер, һуғандар, помидор һәм боростар – йәшелсәм уңды быйыл!

**"Баҡсала эшләйбеҙ" уйыны**.

(Бәрәңге, кишер, сөгөлдөр йыйыу)

**Алып барыусы:** Балалар ураҡ урған саҡта йырлай-йырлай эшләгәндәр. Беҙҙең балалар йыр әҙерләне.

**Йыр “Уңыш быйыл мул ғына”**

**Алып барыусы:** Әминә ҡыҙыбыҙ ураҡ урғанда, беҙ башаҡтарҙы йыйып алайыҡ әле.

**“Башаҡ йыйыу “уйыны**

*Ҙур ҡалас сығарыла.*

**Алып барыусы:** Бына, балалар, яңы уңыш ононан икмәк менән башҡорт халҡыбыҙҙың йолаһы буйынса байрамға килгән Сөмбөләне һыйлайыҡ, үҙебеҙ ҙә ашайыҡ, берҙәм булайыҡ.

Икмәк – табын ҡояшы!

Икмәкте ҡәҙерләргә кәрәк.

Икмәкте иҙәнгә ташларға яраймы?

Икмәкте үҫтерер өсөн күпме көс түгелә, иртә яҙҙан алып көҙгә тиклем яланда эшләйҙәр.

**Сөмбөлә:** Оҡшанығыҙ һеҙ миңә,
Күңелле йәшәйһегеҙ!
Көҙ шикелле бай күңелле,
Яҙҙай матур икән һеҙ!
Ҡалдырам һеҙгә, дуҫтар,
Көҙ байлығын, муллығын,
Тырыш, шат балаларға
Йомарт минең күңелем!
Һау булығыҙ! Бер йылдан тағын килермен!

**Бөтәһе:** Һау бул, Сөмбөлә!

**Алып барыусы**: Хуш, Сөмбөлә, иҫән бул! Муллыҡ менән тағын кил! Ә һеҙ, балалар, тәртипле, тәүфиҡлы, иманлы булып үҫегеҙ. Йыйып алған уңышты именлектә ҡулланырға яҙһын, ил-йортобоҙ бәрәкәтле булһын,

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**

1. Гөбәйҙуллина Ф.Ғ. Беҙҙең байрамдар. Өфө: Китап, 2004.

2. Аҙнабаева Ф.Ғ., Шафикова Г.Р. Тәбиғәт һәм кеше. Өфө: Китап, 2012.

**ЙӨКМӘТКЕҺЕ**

Баш һүҙ.....................................................................................3

Абдуллина Г.И., Вәхитова М.Ф.
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ СУВЕРЕНИТЕТЫ КӨНӨНӘ АРНАЛҒАН “СӘСКӘ АТ, БАШҠОРТОСТАНЫМ!” БАЙРАМЫ СЦЕНАРИЙЫ..................4

Атанғолова Р.Т.
“Серле һандыҡ”. БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ МИЛЛИ КЕЙЕМДӘРЕ.....................................................................11

Вәхитова М.Ф.
“ҺЫУ БУЙЫНА ЭКСКУРСИЯ” КОНСПЕКТЫ................15

Ғарифуллина Р.Ф.
«ШӘЖӘРӘ»БАЙРАМЫ. *Мин – тамырҙан сыҡҡан бер сәскә!*.....................................................................19

Заһиҙуллина Г.Н.
“БАШҠОРТОСТАН – ДУҪЛЫҠ ИЛЕ,
ҺӘР МИЛЛӘТ УНЫҢ ГӨЛӨ!”............................................31

Заһиҙуллина Г.Н.
“ҠАРҒА БУТҠАНЫ» БАЙРАМЫ......................................36

Норова Л.А.
"ТЫУҒАН ЯҒЫМ-БАШКОРТОСТАН"...............................43

Рәжәпова Р.А.
«ҠАҘ ӨМӘҺЕ» БАЙРАМЫ СЦЕНАРИЙЫ.......................47

Хәкимова Р.Р.
«ЕТЕМ ТӨЛКӨ» БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ӘКИӘТЕ СЦЕНАРИЙЫ........................................................................52

Әйүпова З.С.
“СТӘРЛЕБАШ БИҘӘКТӘРЕ”. Кис ултырыу/ Посиделки...........................................................................57

Әйүпова З.С.
«ТУҒАН ТЕЛ» / «РОДНОЙ ЯЗЫК»....................................62

Яушева Р.К.
“ӨЛӘСӘЙҘЕҢ БАУЫРҺАҠТАРЫ”...................................68

Яушева Р.К.
«АЛТЫН УРАҠ» БАЙРАМЫ..............................................73

*Учебно-методическое пособие*

Галина Галима Галимьяновна,
Давлеткулова Гульфия Шафкатовна,
Султакаева Раушания Абдулхаевна,
Тагирова Салима Айбулатовна,
Хусаинова Ляйля Мидхатовна

**МОЙ КРАЙ РОДНОЙ – СТЕРЛИБАШ**

Разработки мероприятий,
апробированных воспитателями в детских садах
Стерлибашевского района

*(на башкирском языке)*

*Материалы публикуются в авторской редакции*

450008, г. Уфа, ул. Октябрьской революции, 3а